ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Кискe Өфө
14-20 февраль (шаҡай) 2015
№7 (633)
kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡышты оҙатып,**



яҙҙы ҡаршылап

6,11

**Спортта ла дуҫлыҡ бар һәм...**



ул "Еңәм" тигән сәмдән көсләрәк

8

**Башҡорт моңон...**



Мәскәүҙә яңғырата улар

9

**Утлы йылдар шаһиты -**

хаттар эҙенән



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, беҙҙең менән дуҫлыҡты дауам итеүселәргә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Һеҙгә шундай мәғлүмәт: 1 февралдән 31 мартҡа тиклем быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда һәм ташламалы хаҡ (513 һум 72 тин) менән яҙылыу бара. Апрелдә хаҡтар артыу ихтималлығын күҙҙә тотоп, гәзитебеҙгә әле үк яҙылып ҡуйырға кәңәш итәбеҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Тормошобоҙҙа изге ғәмәлдәргә урын бармы?

***Сәлиә МЫРҘАБАЕВА, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Заманалар нисек кенә үҙгәреп тормаһын, кешелек барыбер күпселектә үҙ асылына тоғро ҡала килә. Ә кешелек асылы - ул яҡындарыңа ғына түгел, хәстәрлеккә, күңел йылыһына мохтаж булған башҡа кешеләргә ҡарата ла изгелек ҡылыу, миһырбанлыҡ күрһәтеү. Мин был төшөнсәне намыҫ ҡушыуы тип тә, табип һәм депутат булараҡ, иңемә йөкмәтелгән бурысым тип тә аңлайым. Ә изгелекле мөнәсәбәт, эскерһеҙ ярҙам сараларына мохтаждар бик күп беҙҙә. Шуны аңлап, ҡулдарынан килгән тиклем халҡы өсөн изгелек күрһәтергә әҙер торған эшлекле шәхестәр һәм теләктәштәрем ярҙамында "Мираҫ" мәрхәмәтлек фонды төҙөүгә өлгәштек. Финанс ярҙамы ла килеп сыҡты, Попечителлек советы ойошторҙоҡ. Депутат бурыстарына тотонғас та эш программамды бер нисә проект йүнәлешендә күҙаллағайным. Әлеге Фондты ойоштороу ана шул ниәттәрҙе атҡарыуға юл асты ла инде. Бергәләшеп, ҡайһы йүнәлеште тәү сиратта тормошҡа ашырыу кәрәклеге тураһында кәңәшләшкәс, эште башлап та ебәрҙек. Мәрхәмәтлек фонды тәүге ярҙамды республикабыҙҙа спорттың интеллектуаль төрҙәренең береһе - шашканы үҫтереүгә күсерҙе. Йәш шашкасылар мәктәбенә, белеүегеҙсә, халыҡ-ара шашка буйынса биш тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина етәкселек итә. Йәш спортсыларҙың ярыштарын ойоштороу, күнекмәләр үткәреү, призлар һатып алыу һәм башҡа сараларҙы үткәрешеүҙә ярҙам итәбеҙ. Мәрхәмәтлек фонды ярҙамын был йәһәттән күпмелер ваҡытҡа иҫәпләнгән сикле сара тип түгел, ә балаларҙың өмөтлө киләсәге өсөн эшләүсе оҙайлы маҡсатлы программа тип ҡабул итәбеҙ. Бынан тыш, Мәскәү һәм Санкт-Петербургта белем алыусы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы менән дә тығыҙ хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Мәрхәмәтлек фонды исеменән уҡыуҙа, ғилми эш менән шөғөлләнеүҙә, спортта, мәҙәни өлкәлә иң әүҙем ҡатнашҡан йәштәрҙе матди дәртләндереү саралары күрелә. Уларға шулай уҡ һәр төрлө конкурстар үткәреүҙә булышлыҡ итәбеҙ, лауреаттарҙы билдәләйбеҙ. Был йүнәлешкә лә мин ҙур өмөттәр бағлайым: йәштәр тыуған Башҡортостаныбыҙға әҙерлекле кадрҙар булып ҡайтыр, мөмкинлектәрен республика киләсәге хаҡына бағышлар, тип ышанам. Беҙҙең Мәрхәмәтлек фонды Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы, республикабыҙҙа тиҙ арала танылыу яулап өлгөргән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлегенә лә ярҙам күрһәтә. Айыҡ ауылдар, татыу ғаиләләр, туған теле, иле менән ғорурлыҡ кисереүсе илһөйәрҙәр күбәйһен, балалар ата-әсәле булһын, тип тырышабыҙ. Туған тел, тигәндән, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы менән берлектә алып барылған тағы бер проектыбыҙ тураһында әйтмәй ҡала алмайым. Әсә телебеҙҙе һаҡлау, үҫтереү, популярлаштырыу маҡсаттарын алға ҡуйып, "Башҡорт телен өйрәнәм" тигән проектты тормошҡа ашырыуыбыҙ һөйөнөслө булды. Бағыусы тапһаҡ, уны артабан да дауам итәсәкбеҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# БИҘӘЛЕШЕ ЛӘ МАТУР...

## эстәлеге лә бай

Мәғлүмәткә ҡытлыҡ юҡ бөгөн. Йөҙәрләгән гәзит-журнал сыға, көнөтөнө телевизор, радио һөйләп тора, ҡул аҫтында интернет селтәре. Бындай күптөрлөлөк араһында үҙеңә кәрәкле генә мәғлүмәт сығанағын табыуы ауырға төшә. Бигерәк тә гәзит-журналдарҙың ҡайһыһына өҫтөнлөк бирергә белеп булмай, сөнки уларҙың һәр береһе үҙенсә ҡыҙыҡлы һәм үҙенсәлекле. Ләкин беҙҙең ғаиләлә бер генә гәзиткә - "Киске Өфө"гә - яҙылыу-яҙылмау тураһында бәхәс сыҡмай, сөнки һәр быуын вәкиле уның биттәрендә үҙен ҡыҙыҡтырырлыҡ мәғлүмәт таба.

Гәзитте ҡулға алғанда күҙ ҡарашы, тәү сиратта, уның биҙәлешенә төшә. "Киске Өфө"нө ошо йәһәттән ыңғай яҡтан билдәләп үткем килә. Гәзиттәге һәр мәҡәләнең тәғәйен рубрика аҫтында сығыуы уны тағы ла йөкмәткелерәк итә. Мәҡәләне тулыландырып килеүсе һүрәттәр ҙә эстәлеккә тап килеп, уны байыта. Күңелгә ятышлы тағы ла бер билдәне әйтеп үткем килә. Гәзит битендә баҫылған һәр мәҡәлә - журналистарҙыҡы ла, гәзит уҡыусыларҙың хаттары ла - уйланыуға этәрә, ойоп барған фекерләү ҡеүәһен уята. Баҫмала донъя күргән бәләкәй генә бағанала ла, ике битлек ҙур әңгәмәлә лә актуаль донъяуи мәсьәләләр күҙгә бәрелеп ята. "Монолог", "Диалог", "Ижадхана" кеүек рубрикалар йәнле булыуҙары менән айырылып тора. Милләтебеҙҙең абруйлы шәхестәренең, халҡыбыҙҙың лайыҡлы ул-ҡыҙҙарының, төрлө һөнәр эйәләренең һәр һүҙе күңелгә яҡын һәм уҡымлы. Көн һайын тиерлек үҙгәреп торған төрлө закондар араһында аҙашып ҡалмаҫҡа, гражданлыҡ хоҡуғынды белеүҙә "Һорау-яуап" рубрикаһындағы мәғлүмәттәр ярҙам итә. Шулай уҡ "Киске Өфө" яҡшы кәйеф сығанағы, уны уҡыйһың һәм тормоштоң бик күп ыңғай яҡтарын күрә башлайһың.

Гәзит тураһында минең ошондай фекерҙәрем - биҙәлеше лә күркәм, эстәлеге лә бай.

Гәзиттең даими уҡыусыһы булараҡ, баҫмала этикет ҡағиҙәләре бирелеп барылһа ине, тигән теләк еткерге килә. Шулай уҡ донъяла төрлө өлкәгә ҡағылышлы ҡыҙыҡлы мәғлүмәт күп - улар тураһында уҡыу ҙа беҙгә, гәзит уҡыусыларға, ҡыҙыҡлы булыр ине.

**Илһам ЯЙЫҠБАЕВ.**
**Дәүләкән ҡалаһы.**



Әбйәлил сәсәниәләре Хәнифә Әбүбәкирова менән Вәсилә Садиҡова.

12+

✓ "Һуҡҡан өсөн 1 доллар, ә ҡайҙа һуғырға белгән өсөн 99 доллар", - тип яуап биргән ти Ландау. Шунан ҙур ҡәнәғәтлек менән уға тейешле хаҡты түләгәндәр.



БАШ ЙОРТТА



# КИТАПХАНАЛАР КҮП...
## тик унда башҡорт баҫмалары юҡ

**Республикабыҙҙың баш ҡалаһына килеп төпләнеүемә быйыл 20 йыл. Ошо ваҡыт эсендә бер тапҡыр ҙа йәшәү өсөн Өфөнө һайлауыма үкенмәнем. Миллионлы ҡаланың бер өлөшө булып ғүмер итә алыуымдан, балаларымдың үҙҙәрен өфөләләр итеп ғорурланыуынан һәр саҡ шатлыҡ тойғоһо кисерәм. Көндән-көн Башҡортостаныбыҙҙың кендеге - Өфөбөҙ - гүзәлерәк була бара.**

Эшкә автобуста бер сәғәт тирәһе барам. Көн һайын тәҙрәнән бер үк күренештәрҙе күҙәтһәм дә, улар бер ҡасан да ялҡытмай. Киреһенсә, һәр ваҡыт ҡала урамдарында үҙем өсөн ниндәйҙер яңылыҡ табам. Уларҙың оҡшағандары ла бар, оҡшамағандары ла. Уларҙың бер-нисәүһенә туҡталып үткем килә. Мәҫәлән, күптән түгел ҡала урамдары, проспекттар буйлатып ҡуйылған башҡорт халыҡ мәҡәлдәре, яҙыусыларҙың матур эстәлекле фекерҙәре яҙылған транспоранттарҙы күреп ҡыуанғайным. Ләкин ошо арала уларҙың ҡайһы берҙәрен йәй буласаҡ саммитҡа арналған яҙмалар алыштырыуын күреп, аптырап ҡалдым. Был мөһим сара уҙғас, ҡалабыҙҙың йөҙөн тағы ла яҡтыртып ебәргән яҙыуҙарҙы урындарына ҡайтарырҙар, моғайын, тип өмөтләнәм.

Шулай уҡ Өфөлә миңә китапханаларҙың күп булыуы оҡшай. Ҡайһы бер ҡалаларҙағы кеүек, замана ауырлығына, аҡса юҡлығына һылтанып, беҙҙәге китапханалар ябылманы. Һәр кем өсөн ишектәре асыҡ булған был аң, белем усаҡтарында китаптар ҙа, башҡа баҫмалар ҙа күп. Тик Ә.З. Вәлиди исемендәге китапхананан тыш, ҡаланың башҡа китапханаларында башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдар юҡ тиерлек. Ни өсөн ниндәйҙер ялтырауыҡ, мәғәнәһеҙ журналдарға яҙылыу өсөн аҡса табыла, ә үҙебеҙҙең республика баҫмалары ситтә ҡала? Башҡорт телендә сыҡҡан ваҡытлы матбуғатты "Өфө-матбуғат" киоскыларында ла табып булмай ине, ләкин күптән түгел яңынан һатыуға сығарыуҙары маҡтауға лайыҡ күренеш.

Өфөбөҙ ҙур булһа ла өфөләләр һәм баш ҡала ҡунаҡтарына бер нөктәнән икенсеһенә барып етеү ауырлыҡ тыуҙырмай, сөнки пассажирҙар өсөн ҡала урамдарына йөҙәрләгән автобус сыға. Уларҙың бик күп булыуына беҙ өйрәнеп тә киткәнбеҙ, буғай, ә ситтән килеүселәрҙең күҙенә тиҙ эленә. Шулай, ауылдан килгән танышым: "Өфөлә бер кешегә бер автобусмы әллә ул?" тип аптырағайны. Ысынлап та, бер йүнәлештә яртылаш буш әллә нисә автобус йөрөй һәм уларҙың һәр ҡайһыһы пассажирҙар өсөн көрәшергә әҙер. Шәхси маршруттар тулҡынында "Башавтотранс" автобустары хәүефһеҙлек йәһәтенән дә, пассажирҙарға булған яҡшы мөғәмәлә яғынан да айырылып тора. Шулай уҡ миңә "Башавтотранс" уҙғарған төрлө акциялар ҙа оҡшай һәм мин уларҙа ихлас ҡатнашам.

Гәзит уҡыусылар иғтибарына ошондай фекерҙәремде еткергем килде. Ә баҫманың башҡа уҡыусылары баш ҡалабыҙ хаҡында ниндәй фекерҙәр йөрөтә икән? Улар хаҡында уҡыу барыһына ла ҡыҙыҡлы булыр ине.

**Әмир ИШМУРЗИН.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Тормошобоҙҙа изге ғәмәлдәргә урын бармы?

(Башы 1-се биттә).

***Гөлшат ИБРАҺИМОВА, "Әсә йөрәге" әсәләр советының БР төбәк ойошмаһы рәйесе:*** Батырлыҡҡа тормошобоҙҙа һәр саҡ урын булған кеүек, шәфҡәтлелек, изгелек кеүек төшөнсәләргә лә һәр заманда ла урын бар. Быға мин үҙ ғүмеремдә мөмкинлеге сикләнгән балалар һәм уларҙың ата-әсәләре менән эшләгән бөтә ошо йылдар буйына инанып йәшәйем, сөнки юлымда бик күп яҡшы кешеләр осрап тора. Бәхеткә күрә, ундайҙар күп тормошобоҙҙа. Хәҙер балалар, айырыуса үҫмерҙәр ҡаты бәғерле, тигән фекерҙе йыш ишетергә тура килә. Мин быны менән килешмәйем, сөнки ололар, йәғни уларҙың ата-әсәләре үҙҙәре үҫтерә уларҙы шундай итеп. Миһырбанлыҡ - ул ғаиләлә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙән, балалар баҡсаһынан, мәктәптән һалына. Бала күңелен изгелеккә фәҡәт беҙ үҙебеҙ, ата-әсәләр генә әйҙәй алабыҙ. Әйтеүемсә, мөмкинлеге сикләнгән балалар үҙҙәрен тормош тарафынан йәберһетелгән итеп тоймаһын, киреһенсә, йәшәйешебеҙгә позитив ҡараштa булһын, тип тырыша беҙҙең мәрхәмәтлек ойошмаһы. Был йүнәлештә бик күп шәфҡәтлелек саралары үткәрелә. Мөмкинлеге сикләнгән балалар һәм уларҙың ата-әсәләре ҡатнашлығында байрамдар, тантаналы кисәләр, конкурстар уҙғарабыҙ. Инвалид балаларҙың, айырыуса уларҙы бағыусы әсәләрҙең мәнфәғәтен беренсе урынға ҡуйырға тырышабыҙ, сөнки, әйтеүемсә, баланың донъяға ҡарашы, кәйефе күп йәһәттән әсәнең күңел торошона бәйле. Әсәләрҙе махсус курста реабилитолог һөнәренә уҡытып та сығарабыҙ. Был уларға өйҙә үҙ хәсрәтенә бикләнеп ултырырға түгел, ә махсус балалар учреждениеларында эшләргә лә, шул уҡ ваҡытта үҙ балаларын ҡарарға ла мөмкинлек бирәсәк. Бындай ғаиләләрҙең социаль хоҡуҡтарын яҡлауға ла өлөш индерергә тырышабыҙ. Беҙҙең юллауҙар һөҙөмтәһендә хәҙер инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр бушлай ер участкаһы менән тәьмин ителә.

***Светлана Сәфәрғәлина, башланғыс класс уҡытыусыһы:*** Класс сәғәттәре өсөн эш планы төҙөгәндә, быйылғы йыл календарын ҡарап ултырҙым. Ниндәй генә иҫтәлекле даталар юҡ хәҙер. Традицион һәм һөнәри байрамдар менән билдәле шәхестәрҙең юбилейҙарын иҫәпләмәгәндә, тәү ҡарашҡа, ҡайһы бер ҡыҙыҡ ҡына иҫтәлекле көндәр индерелгән календарға һуңғы йылдарҙа. Мәҫәлән, Бөтә донъя рәхмәт әйтеү көнө, Бәхет көнө, Бесәйҙәр көнө, Йоҡо көнө, Ер-Әсә көнө, Ҡояш көнө, Джинсы көнө, Шоколад көнө, хатта майҙың 31-е - Блондинкалар көнө тип иғлан ителгән! Бер яҡтан, быларҙы етди ҡабул итмәҫкә лә була, тик шулар араһында 17 февралдең "Уйлап та тормаҫтан изгелек эшләү көнө" тигәне ҡыҙыҡлы тойолдо. Кескәй уҡыусыларыма бына тигән тәрбиәүи тема ла баһа! Әлбиттә, тәүҙә мин уларға изгелекте уны ғүмер буйы эшләргә кәрәк, тип өйрәтермен, ә ундай көн булдырыу изгелек төшөнсәһен "оно-топ" киткән кешеләр өсөн иҫкәртеү генә, тип аңлатырмын. Мәҫәлән, автобусҡа һәм трамвайға өлкән кеше йә бала күтәргән әсәләр килеп инеү менән һикереп тороп урын биреүҙе, магазин йәки башҡа берәй бинаға ингәндә осраған өлкәндәрҙе, үҙеңдән кесерәктәрҙе алдан үткәреү, шулай уҡ уларҙы юл аша сығарышып ҡуйыу һәм башҡа шундай матур ғәмәлдәрҙе балалар кесе йәштән көндәлек ғәҙәттәренә әүерелдерһен, тип тырышам, юғиһә, бындай шәфҡәтлелек бөгөн күптәрҙең ғәҙәте булыуҙан туҡтаны. Ғөмүмән, уйлап та тормай бәләгә ҡалған кешегә ярҙамға ташланыу күренеше һирәгәйә бара тормошобоҙҙа. Был турала былтыр интернетҡа ҡуйылған социаль ролик видеоһы йәмәғәтселектә шаушыу тыуҙырҙы: йөрәген тотоп йығылған йә көс ҡулланыусынан ҡотолорға тырышып ҡысҡырған ҡатын-ҡыҙ йә үҫмергә (был ролде алдан өйрәтелгән махсус кешеләр башҡара) ярҙамға килеүселәр икәү-өсәү генә генә булып сыҡты. Ошондай инсценировкалар шаһиты булған кешеләрҙең 70 проценты битарафлыҡ күрһәтеп, бер ни булмағандай үтеп китте... Эйе, һирәк күренеш мегаполистарҙа шәфҡәтлелек һәм ярҙамсыллыҡ. Ахырыһы, шуға күрәләр ҙә, бындай изгелек эшләүҙе йыш ҡына ниндәйҙер ғәҙәттән тыш хәл, хатта батырлыҡ тип күрһәтеү (айырыуса киң масса сараларында) ғәҙәткә инде, ә бит был кеше инстинктының тәбиғи бер сағылышы, намыҫы һәм выжданы ҡушыуы ғына ни бары. Кешелек аңында ана шул һәләттең юҡҡа сыҡмауы өсөн ғаилә тәрбиәһе менән бер рәттән, беҙ - уҡытыусылар ҙа яуаплы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҠАЙҘА ҺУҒЫРҒА БЕЛЕГЕҘ!

**Рәүф ӘЛМӨХӘМӘТОВ, "Банкос" фирмаһы директоры:** Мин бизнес менән шөғөлләнә башлауға быйыл 25 йыл, "Банкос" предприятиеһын төҙөүгә 23 йыл тулды. Үҙ тәжрибәмдән сығып, йәштәргә белем алырға, ниндәй генә ауырлыҡтар килеп тыуғанда ла аҡыл менән, дәртләнеп эшләргә кәңәш итер инем. Бөгөн беҙҙе борсоған көрсөк, кредит процентдарының юғары булыуы, һатып алыусыларҙың мөмкинлектәре түбәнәйеүе - барыһы ла ваҡытлыса, үтә торған ҡыйынлыҡтар. Иң мөһиме, үҙ эшеңдең белгесе, ҡаршылыҡтарҙы үтеп сығыу юлдарын эҙләп табырға теләгең булырға тейеш.

Ошо йәһәттән үтә фәһемле бер лаҡап һөйләйем әле. Билдәле ғалим Ландауҙы бер фабрикаға саҡырғандар, нимәлер эшләмәй икән, сәбәбен таба алмайҙар. Был килгән дә, фабрика буйлап ҡарап йөрөгән: бөтә нәмә геүләп эшләп тора. Ландау уйлаған-уйлаған да, бер ауыр сүкеш алып, төп подшипниктың урынына бөтә көскә һуҡҡан икән, приборҙар һин дә мин эшләгән дә киткән, ти. Ландауға рәхмәт йөҙөнән яҡшы хаҡ түләргә булып, күпме аҡса алырға теләүен һорағандар. Ул, йөҙ доллар, тигәс, былар шаҡ ҡатҡан. "Ни өсөн һин бер тапҡыр ғына сүкеш менән һуҡҡан өсөн 100 доллар һорайһың?" - тиҙәр икән, заманы өсөн бик ҙур аҡса булған инде. "Һуҡҡан өсөн 1 доллар, ә ҡайҙа һуғырға белгән өсөн 99 доллар", - тип яуап биргән ти Ландау. Шунан ҙур ҡәнәғәтлек менән уға тейешле хаҡты түләгәндәр. Бына шулай, һәр ерҙә аҡыл менән эш итергә, креатив булырға, ҡайҙа һуғырға, ниндәй йүнәлештә барыуыңды белергә кәрәк.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов Ишембай ҡалаһына нигеҙ һалыныуға 75 йыл тулыуға арналған тантаналы сарала ҡатнашты. Ул ҡаланың сәнәғәт предприятиелары продукцияһы күргәҙмәһен ҡараны, Ишембай халҡын байрам менән ҡотлап, дәүләт наградалары тапшырҙы.

✓ Өфөлә "Йәштәр тыныслыҡ йырын йырлай!" тип аталған патриотик йыр конкурсына ғаризалар ҡабул итеү башланды. Быйыл бәйге Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналасаҡ. Конкурста 10 йәштән 30 йәшкәсә яңғыҙ башҡарыусылар, вокаль ансамблдәр, профессиональ артистар ҙа, һәүәҫкәр йырсылар ҙа ҡатнаша ала. Һайлап алыу туры - 27-28 мартта, конкурстың финалы апрелдә уҙа. Ғаризалар 2015 йылдың 31 мартына тиклем molodoe.tvorchestvo@yandex.ru электрон почтаһына йәки Өфө ҡалаһы, Сипайлово урамы, 14 адресы буйынса ҡабул ителә.

✓ Башҡортостан юғары уҡыу йорттарының дүрт фән кандидаты Рәсәй Федерацияһы Президенты гранттарын алды. Улар араһында Башҡорт дәүләт университетының ғәмәли математика һәм һан алымдары кафедраһы доценты Айгөл Манапова айырылып тора.Рәсәй Федерацияһы Президенты гранттары ғәмәли тикшеренеүҙәр уҙғарыуға сығымдарҙы финанслау өсөн ике йылға бүленә. Фән кандидатының грант күләме - йылына 600 мең һум, фән докторының 1 миллион һум тәшкил итә.

✓ Башҡортостанда йәшәүсе ветерандарға һәм тыл эшсәндәренә Еңеүҙең 70 йыллығы айҡанлы юбилей миҙалдары тапшырыласаҡ. 2013 йылдың декабрендә РФ Президенты Владимир Путин "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 70 йыл" юбилей миҙалын булдырыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республикала 69 меңгә яҡын ветеран йәшәй, шуларҙың 65 меңгә яҡыны награда аласаҡ. Өфөлә 15 мең ветеранға юбилей миҙалдарын тапшырыу күҙаллана.

✓ Цюрихта йәштәр араһында каратэ буйынса 42-се Европа чемпионаты үтте. Чемпионатта 47 илдән меңгә яҡын спортсы ҡатнашты. Улар 35 категорияла наградалар комплекты өсөн көрәште. Өфө спортсыһы Альберт Ғәлимов 63 килограмм ауырлыҡ категорияһында 14-15 йәшлектәр араһында кумиту бүлегендә сығыш яһаны һәм бронза миҙал яуланы.

*✔ Илдә әпкәләйҙәр, илһөймәстәр ишәйһә, бөтөн көсөңдө дуҫтар тәрбиәләүгә йүнәлтергә кәрәктер. Ә ҡылыс болғап, яуға ташланыуҙан, мөнәсәбәттәр асыҡлауҙан файҙа юҡ. Дуҫтар күбәйһә, дошмандан ҡурҡмай йәшәләр.*



КИЛЕШМӘЙЕМ!

# МОҢ СЫҒАНАҒЫН...

## халҡың күңеленән эҙлә



**"Киске Өфө" гәзите хаҡында "Ул заманыбыҙ менән бергә атлай, был уларҙың көнүҙәк темаларында ла бик асыҡ сағыла", тиһәм, уны алдырып уҡыусылар минең менән килешер, моғайын. Гәзиттә баҫылған мәҡәләләр ҡыҙыҡлы һәм фәһемле, шуға күрә ата-әсәләр, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр "Киске Өфө"нө даими уҡып бараларҙыр, тигән фекерҙәмен.**

Бына мин дә гәзитебеҙ сығыштарына битараф булмаған ана шундай уҡыусыларҙың береһе булараҡ, уҡып ҡына ҡалмай, ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр булдым хатта. Хат яҙыуымдың сәбәбе - күптән түгелге һандарҙың береһендә Фирүзә Ишбирҙина тигән автор күтәргән мәсьәлә. Атап әйткәндә, уның "Йыр тынлағы килә - йөрәктән сыҡҡанын" (№2, 2015) тигән мәҡәләһе тураһында бара һүҙ. Мин автор фекерҙәре менән тулыһынса килешәм, бик дөрөҫ яҙылған. Үҙ йырҙарын башҡарыусы авторҙар хаҡында ла бик дөрөҫ әйтә Ф. Ишбирҙина. Йырсы йәки композитор булыр өсөн музыка мәктәбендә, артабан 4-5 йыл сәнғәт колледжы йә институтында уҡырға кәрәк икәнлеге билдәле бөтәбеҙгә лә. Ә хәҙер кем теләй (әллә түләй?) - шул ҙур сәхнәләрҙән тороп йырлай. Ярай, йырлаһындар ҙа, ти: кешенең ауыҙын томалап булмай. Ә бына башҡарған йырҙары ниндәй һуң - һүҙ бит шул хаҡта бара. Элек сәнғәт әҫәрҙәре "худсовет" тигән бик талапсан комиссия ҡарауынан үткәс кенә ҙур сәхнәләрҙә башҡарыуға сығарыла ине, бөгөн ундай тәртип юҡ, күрәһең: ни көйө, ни һүҙҙәре күңелгә ятышлы булмаған "әҫәрҙәр" күбәйеп киткәнгә күрә әйтәм быны. Төрлө ноталарҙан ҡоршап ҡына көй сығарып булмайҙыр бит инде. Баяғыса, үзбәк йә төрөк мотивтарын файҙаланыу ҙа шунан килеп сығалыр, күрәһең. Халҡыбыҙҙың йыркөйҙәрен белмәү, өйрәнмәү ҙә сәбәпселер быға, тип уйлайым. Әбит башҡорттоң моң даръяһы бер ни менән алыштырғыһыҙ шинмәҫ хазина!

Концерт һәм һәр төрлө мәҙәни сараларҙы шәмбе, йәкшәмбеләрҙә көндөҙ үткәреү тураһындағы фекер ҙә дөрөҫ. Мәҫәлән, мин үҙем Өфө районындағы ауылға күсеп киткәс, элек яратып ҡараған концерт һәм спектаклдәргә йөрөп булмай башланы. Ә минең өсөн улар йән аҙығы ине. Кеше концерт һәм театрҙарға йөрөмәһә, депрессия башлана, тип уҡығаным бар. Киске 9-10-дарға ауылына ҡайтыуы ҙур проблема ул, әгәр машинаң булмаһа. Көндөҙгө концерттар тураһындағы мәсьәләне гәзит биттәрендә генә ҡалдырырға ярамайҙыр, тием. Гәзиттә әләнгән әле бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле һөйләшеүҙәр ойошторолоп килә. Әлеге мәсьәләне лә, бәлки, филармония һәм театр етәкселәре, Мәҙәниәт министрлығы вәкилдәре менән түңәрәк ҡор артында ултырып көнәшләшергә кәрәктер?

**Эльвира ӘХМӘТЙӘНОВА.**
**Өфө районы.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Гәзитебеҙ сығыштарына битараф ҡалмаған уҡыусыларыбыҙҙың береһе - Эльвира Әхмәтйәноваға рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Уның хаты быныһ менән генә тамамланмай, артабанғы юлдарҙа автор Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тапшырыуҙарына ҡағылышлы фекерҙәре менән дә уртаҡлаша. Был хаҡта ошоға тиклем "Киске Өфө" биттәрендә сығыштар байтаҡ булғанға күрә, хатты Башҡортостан юлдаш телевидениеһы адресына ебәреү маҡсатҡа ярашлы булыр, тип табылды.**

# УРЛАШМАЙЫҠ...

**Кем нисектер, әммә бала саҡтан "китап ене" ҡағылғанлыҡтан, нимәләр уҡымай торһам, үҙ-үҙемә урын тапмай башлайым. Шуға ла башҡорт әҙиптәренең йәки башлап яҙыусыларының һәр әҫәрен үк булмаһа ла, мөмкин тиклем уҡып барырға тырышам.**



Шулай, Яңы йыл алдынан, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте магазинынан бер пакет китап тейәп ҡайтып, "йығылып ятып" уҡыным. Ысын мәғәнәһендә йығылып яттым, сөнки бер хикәйә аяҡтан йыҡты, тиергә мөмкин. Быныһ сәбәбен саҡ ҡына һуңыраҡ аңлатырмын, ә ул ваҡытта автор менән килешмәйенсә үрһәләнгән күңелемдә баҫыр өсөн матбуғат баҫмаларының береһендә донъя күргән икенсе әҫәрҙе, авторын да ҡарап тормай, уҡый башланым. Әммә уҡыған һайын көйефем ҡабат ҡырыла башланы - был әҫәр ҙә үҙенең таныш сюжеты менән "аяҡтан йыҡты"...

Моғайын да, беҙҙең башҡорт авторҙарының сценарийҙары буйынса кино төшөрә башлағандарҙыр ҙа, мин генә был яңылыҡтан ситтә ҡалғанмындыр, тип, үҙемде бер аҙ тынысландырырға теләнем. Сөнки бынан бер нисә йыл элек күрһәтелгән "Мамы" фильмының беренсе серияһындағы бер сюжет тап мин уҡыған хикәйәнең сюжетына ҡоролған бит. Ә инде икенсе әҫәр "Андрейка" киноһын бермә-бер тигәндәй ҡабатлай, тик исемдәре генә үҙгәртелгән...

Ошо хаҡта әҙәбиәт даирәһендә ҡайнаған бер танышыма әйтһәм, ул тыныс ҡына: "Ер йөҙөндә ни бары 28 сюжет бар, шуға әҫәрҙәр бер-береһенә оҡшауына ла аптырарға ярамай", - тип әйтеп ҡуйҙы. Бәлки, шулайҙыр ҙа, әммә... Тормошобоҙҙа бит - тарихыбыҙҙа, бөгөнгөбөҙҙә - ситтән алмаһаҡ та, ҡулында ҡәләме, тел байлығы һәм яҙырға өндәп торған дәрте булған кеше өсөн күпме әҙер сюжет бар. Шулай түгелме ни?

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ШАҢДАУ

# ДОШМАНЫҢДЫ...

## йылмайып ең



**Гәзитебеҙҙең быйылғы 3-сө һанында Рәхимә Мусинаның "Дошманыңды дуҫҡа әйләндереп ең!" тип аталған мәҡәләһе баҫылып сыҡты. Шул көндәрҙә мин дә дуҫтар, дошмандар тураһында уйланып йөрөй инем. Был мәҡәлә тағы ҡулыма ҡәләм алырға бер сәбәп булды.**

Иҫегеҙҙәме, халҡыбыҙҙа бер ҡыҙыҡ әйтем бар: "Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ". Ысынлап та, тормош юлын үткән саҡта, исмаһам, саҡ ҡына хәйләле була белеүең дә файҙа килтерә ул. Иҫемдә, партия ҡушыуы буйынса бер цехҡа ваҡытлыса эшкә урынлаштырға тура килгәйне. Унда минең күптәнге танышым эшләй ине, ни сәбәптәндер, ул минең турала төрлө уйҙырмалар һөйләп, цехтағыларҙы минә ҡаршы ҡуйҙы. Шулай итеп, мин көн дә цехтың "эксперименттар" бүлегендә эшләүселәрҙең нәфрәтле ҡарашы менән осрашам. Әммә уларҙың мине яратмауын белгәнемдә белдермәйем, бөтәһе менән дә ихлас йылмайып аралашам. Белдерһәм, мөнәсәбәттәр бөтөнләй түҙеп торғоһоҙ булып китәсәген аңлап торам. Ул саҡта мин, 30 йәшлек ҡатын, донъяның да, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең дә ҡатмарлы булыуын күптән аңлағайным инде. Ана шул башымды йүләрлеккә һалып, кешеләрҙең дошманлығын күрмәмешкә һалышып йөрөүем менән еңдем мин уларҙы: күпмелер ваҡыттан күбеһе минең менән яҡшылап аралаша башланы...

Эйе, ҡайһы саҡта кемдәндер, бөтөнләй таныш булмаған кешенең дә, һиңә нәфрәт менән ҡарағанын тойорға тура килә. Бына бер миҫал. Былтыр грипп менән бик ҡаты ауырып өҙлөктөм. Ҡолаҡтарым насар ишетә башланы. Талон алып, киттем лор табибына. Кабинетҡа һаулыҡ һорашып, йылмайып барып индем. Әммә минең үҙемдә шулай тотоуым оло йәштәге табип ҡатынға оҡшаманы, ул минә шундай уҫал итеп ҡараны. Ҡаушап, тотлоға-тотлоға зарымды һөйләнем. Ул "Бында ултырма, бында баҫ!" тип, минә бер туҡтауһыҙ екерергә кереште. Шулай этеп-төртөп тикшерҙе лә, ҡулыма рецепт тотторҙо. "Нинә генә килдем икән?" тигән үкенес менән, кәйефем ҡырылып сығып киттем. Дарыу һатып алып, "Процедуралар" бүлмәһенә киттем. Сибәр генә шәфҡәт туташы йылмайып ҡаршы алды. Ауырттырмай ғына укол һалды. Күңелемә йылы йүгерҙе. Уколға икенсе көн ингәндә: "Бахилла алырға өлгөрмәнем бит әле", - тип ғәфү үтенгәйнем, ҡыҙыҡай минә шкафтан ике пар бахилла сығарып бирҙе. Өсөнсө көнөнә уколға һуңлай яҙҙым. Ухылдап барып инеп: "Табибҡа сиратта тороп, уколға һуңланым инде, ҡабул итерһегеҙме?" - тинем. "Ҡабул итәм әлбиттә, мин бит һеҙҙе яратам!" - булды яуап. Был шәфҡәт туташының ошо һүҙҙәре генә лә һауығып китерлек булды бит...

Күрәһең, берәү берәүгә тартыла, берәү берәүҙе этәрәләр, тигән уй килә башыма. Шуға ла дошманды бер нисек тә дуҫҡа әйләндереү мөмкин түгелдер ул. Был көндәлек тормоштағы күренештәрҙән тағы шундай һығымта ла яһарға мөмкиндер: илдә әпкәләйҙәр, илһөймәстәр ишәйһә, бөтөн көсөңдө дуҫтар тәрбиәләүгә йүнәлтергә кәрәктер. Ә ҡылыс болғап, яуға ташланыуҙан, мөнәсәбәттәр асыҡлауҙан файҙа юҡ. Дуҫтар күбәйһә, дошмандан ҡурҡмай йәшәләр.

**Айгөл АХУНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Билдәле журналист Азамат Сәлихов Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһының филиалы - "Башҡортостан" ДТРК-һын етәкләне. Азамат Сәлихов 2000 йылдарҙан алып Башҡортостан һәм күрше төбәктәр - Удмуртия һәм Ырымбур өлкәләре буйынса Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһының үҙ хәбәрсеһе булып эшләгән. 2014 йылдың июлендә Украинаға командировкаға барышында һөнәри бурысын үтәгәндә күрһәткән батырлығы өсөн Салауат Юлаев исемендәге орден менән бүләкләнгән.

✔Рәсәй TNS тикшереңеү төркөмө илдең иң популяр 15 төбәк телеканалдары исемлеген билдәләне. Тәүлегенә 18 сәғәттән ашыу күрһәткән үҙ алы каналдар рейтингында Башҡортостан юлдаш телевидениеһы Екатеринбургтың "Дүртенсе каналы" менән алтынсы һәм етенсе урындарҙы билә. Рәсәй TNS тикшереңеү төркөмөнөң мәғлүмәттәре буйынса, төбәктәрҙәге тамашасыларҙы спорт, танып белеү тапшырыуҙары, фильмдар һәм сериалдар ҡыҙыҡһындыра. Ә бына күңел-асыу ток-шоуҙарына ихтыяж төшкән.

✔2015 йылда Башҡортостанда 8,1 мең гектар майҙанда йәш ағас үсентеләрен ултыртыу планлаштырыла. Бөтәһе 10,5 мең гектарҙан ашыу ерҙә урман тергеҙеү эштәре алып барыласаҡ, тип хәбәр иттеләр республиканың Урман хужалығы министрлығынан. Эштәр апрель аҙағында - май баштарында, ағастарҙың бөрөһө асылғанға тиклем башланасаҡ.

✔Әҙәбиәт йылы сиктәрендә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте республиканың көньяҡ-көнсығыш ҡалалары һәм районларында - Баймаҡта, Әбйәлилдә һәм Бөрйәндә китап күргәҙмәһатыу ойоштороҙо.

✔Үткән аҙнала Башҡортостанда 23,5 мең кеше кисҡен респиратор вирусы инфекция (ОРВИ) һәм киҙеү менән сирләгән. Был күрһәткес уртаса күп йыллыҡ кимәлдән 3,2 процентҡа юғарыраҡ. Айырыуса 7-14 йәшлек мәктәп уҡыусылары араһында эпидемик сиктең артыуы теркәлгән. Мониторинг сиктәрендә төбәктә А2 һәм В тибындағы грипп вирусдарының бүленеүе асыҡланған.

**"Башинформ"дан.**

САММИТТЫ ҠАРШЫЛАП

# БРАЗИЛИЯ ЛА...

## Өфөгә килергә әҙерләнә

**Бразилия Федератив Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Антонио Жозе Валлим Геррейро, 2015 йылдың июлендә Өфөлә БРИКС саммиты юғары кимәлдә үтәсәк һәм ошо альянсҡа инген илдәрҙең берлектәге яңы сәйәсәтен һәм иҡтисади стратегияһын төҙөүҙә яңы этап буласаҡ, тип ышана. Был хаҡта ул Мәскәүҙең "Евразия юридик журналы"на биргән интервьюһында һөйләнә. Ул Рәсәйҙең, атап әйткәндә, Башҡортостандың 2015 йылғы саммиттарҙы юғары кимәлдә уҙғарыу мөмкинлеге булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.**

"Һуңғы ун йылда БРИКС сиктәрендә тығыҙ хеҙмәттәшлек итеү дәүләтебеҙҙең тышҡы сәйәсәтенең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһенә әүерелде. 2014 йылдың 15-16 июнендә Бразилияның Форталеза һәм Бразилиа ҡалаларында БРИКС илдәренең алтынсы саммиты уҙҙы, ул беҙҙең хәрәкәткә яңы һулыш бирҙе. Тиҙҙән бындай осрашыу Өфө ҡалаһында үтәсәк. Башҡортостандың баш ҡалаһында БРИКС саммитының юғары кимәлдә үтәсәгенә һәм Рәсәй өсөн дә, БРИКС төркөмө буйынса партнерҙарыбыҙ өсөн дә файҙалы буласағына ышанам. Һис шикһеҙ, Өфөгә Бразилия Президенты Дилма Руссефф киләсәк. Минеңсә, бөтә өлкәләрҙәге хеҙмәттәшлекте тәрәнәйтеү һәм нығытыу буйынса төп бурысты башҡарыу саммит алдында торған бурыстарҙың береһе буласаҡ", - тип белдерҙе баҫмаға Геррейро әфәнде.

АҠШ-тың донъя иҡтисадындағы роле кәмегән саҡта тиҙ үҫешеүсе, тәү сиратта БРИКС-ҡа инген дәүләттәр халыҡ-ара аренала ышаныслы сығыш яһай, сөнки улар донъя иҡтисады өсөн мөһим ресурстарға эйә, тип иҫәпләй Бразилия Федератив Республикаһы Илсеһе. Уның билдәләүенсә, планета халҡының 43 проценты БРИКС илдәрендә йәшәй, ысынында, был проблемалар тыуҙыра ла инде. "Халыҡ һанының күплеге ошо илдәрҙәге хеҙмәттең арзанлайыуына килтерә, был иһә иҡтисади үҫеш өсөн ҡаршылыҡ булып тора. 2014 йылғы һөҙөмтәләр буйынса БРИКС илдәре иҡтисадтың түбәнәйеүен борсола. Әммә Өфөлә үтәсәк саммит тауар әйләнешен арттырыуға һәм ойошманың халыҡ-ара аренаһағы әһәмиәтен күтәрергә ярҙам итер тип уйлайым", - ти ул.

Геррейро әфәнде фекеренсә, Рәсәй менән Бразилияның ике яҡлы мөнәсәбәттәре үҫеше динамикаһы ла бик мөһим. 1991 йылдың декабрь аҙағында Бразилия Латин Америкаһы илдәренән тәүгеләрҙән булып Рәсәй Федерацияһын СССР-ҙы дауам итеүсе дәүләт булараҡ таныны, тип билдәләй ул. 2000 йылдың июнендә Рәсәй һәм Бразилия араһында партнерлыҡ мөнәсәбәттәре хаҡында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Ул 2002 йылдың ғинуарынан көсөнә инде. Бразилия менән Рәсәйҙең партнерлығын һаҡлау һәм үҫтереү - беҙҙең өсөн сәйәси бурыс", - тип иҫәпләй Бразилия Федератив Республикаһы Илсеһе.

**Гөлсәсәк ХАННАНОВА.**
**Мәскәү ҡалаһы.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭШҠЫУАРҘЫ НИ БОРСОЙ?

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ вәкилдәре менән осрашыу үткәрҙе.**

Республика башлығы хәҙерге көндә республикала 40 мең бәләкәй һәм 300-гә яҡын урта предприятие эшләй, тип билдәләне. 85 мең самаһы кеше - шәхси эшҡыуар. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ предприятиелары персоналдары һаны - 340 мең кеше. Дөйөм әйләнеш 675 миллиард һумға йәки Башҡортостандың сәнәғәт һәм тауар етештереү әйләнеше 27 процентҡа етә. Шуның менән бергә эшҡыуарлыҡтың был өлөшөндәге инвестициялары бөтәһе 10 процент тирәһе тәшкил итә.

Рөстәм Хәмитов бәләкәй эшҡыуарлыҡ үҫешенә ҡамасаулаусы социологик һорау алыу мәғлүмәттәре асыҡлаған биш ҡаршылыҡты атаны.

- Бөгөнгө көндә эшҡыуарҙарҙы борсоған биш проблема - ул юғары һалымдар, иҡтисади хәлдең билдәһеҙлеге, кредит буйынса юғары ставкалар, һалым ҡануниәтенең тоторолҡоҙлоғо, власть структуралары яғынан эшҡыуарҙарҙың хоҡуҡтарын боҙоу, - тип белдерҙе төбәк етәксеһе һәм, тап бәләкәй эшҡыуарлыҡ ҡатмарлы иҡтисади шарттарҙа үҫеш этәргесе булыуы ихтимал, тип билдәләне.

# ЭСТАФЕТА ДАУАМ ИТӘ

**Баш ҡалала Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған "Еңеү байрағын ҡаршылап" тип аталған патриотик эстафета дауам итә. Ул "Мин - Бөйөк илдең граждыны" мәғариф-патриотик проект сиктәрендә уҙғарыла. Үлемһеҙ полктың шәхси байрағы Рәсәйҙең 10 ҡалаһында ғына бар һәм был исемлеккә Өфө лә инә.**

Бөйөк Еңеүҙең рәсми символын беренселәрҙән булып Дим районы ҡабул итте. Ул мәғариф учреждениеларында булғандан һуң, Киров районының 158-се Башҡорт гимназияһына юлланды. Артабан Еңеү байрағы Ленин, Совет райондарына тапшырылды. Көн һайын уның эргәһендә иң яҡшы уҡыусылар хәтер вахтаһында торҙо. Был аҙнала Байраҡты Октябрь районы ҡабул итте. Һуңынан ул Орджоникидзе һәм Калинин райондарына юл аласаҡ. "Еңеү Байрағын ҡаршылап" эстафетаһы баш ҡалала 23 февралгә тиклем бара. Артабан уны Башҡортостандың башҡа район-ҡалалары ҡабул итеп аласаҡ. Патриотик эстафета тематик дәрестәр, саралар уҙғарыуҙы, ветерандар менән осрашыуҙар ойоштороуҙы ла үҙ эсенә ала. 9 Майҙа Еңеү Байрағы Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған тантаналы ултырышта баш ҡалаға урап ҡайтасаҡ.

# ҠУНАҠТАР ЛАЙЫҠЛЫ ҠАРШЫЛАНЫР

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек сиктәрендә төҙөлөүсе ҡунаҡханаларҙы, реконструкцияланыусы Конгресс-холл бинаһын ҡараны.**

Төҙөлөп ятҡан ете ҡунаҡхананың икәүһе юғары әҙерлек кимәлендә. Бары кухня ҡорамалдарын монтажлау, хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә алыу һәм номерҙарҙы әҙерләү кеүек эштәр генә ҡалған. Өс аҙнанан Гоголь урамындағы "Атола" ҡунаҡханаһын асыу планлаштырыла, ә Аксаков урамында урынлашҡан "Hilton Garden Inn Ufa" отеле 20 мартта тәүге ҡунаҡтарын ҡабул итәсәк.

"Парк-Сити Урал", "Hampton by Hilton Ufa", "Holiday Inn Ufa", "Башҡортостан", "Sheraton" ҡунаҡханаларында эштәр планға ярашлы алып барыла. Мәҫәлән, "Hampton by Hilton Ufa" отелендә фасад эштәре, номер фондын биҙәкләү тамамлана, ә "Sheraton" отелендә мебель килтереү көтөлә.

Республика Башлығы ШОС һәм БРИКС саммиттарының мөһим саралары уҙасаҡ Конгресс-холл бинаһын төҙөкләндереү барышы менән дә танышты. Башҡортостан Хөкүмәте министры Руслан Мирсаяпов төп төҙөлөш эштәренең ҙур кәңәшмәләр, шулай уҡ ике яҡлы осрашыуҙар өсөн тәғәйенләнгән биналарҙа башланыуы тураһында һөйләне. Уларҙың барыһы ла федераль ойоштороу комитеты талаптарына ярашлы әҙерләнгән.Руслан Мирсаяпов реконструкция планға ярашлы башҡарыла һәм объект 1 июлгә тулыһынса әҙер буласаҡ, тип белдерҙе.

# ЭШ УРЫНДАРЫ АРТА

**Өфөлә яңы "Өфөмолгорзавод" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт асылды. Тәүлегенә 150 тонна һөт эшкәртеү ҡеүәтенә эйә предприятие йыл ярым эсендә төҙөлдө. Унда 104 кешегә эш урыны биреләсәк, тип көтөлә.**

Заводта Польшала, Германияла, АҠШ-та һәм Рәсәйҙә эшләнгән ҡорамалдар ҡуйылған. "Өфөмолгорзавод"та "Молочный фермер" һәм "Добрая буренка" бренды менән эремсек, май һәм пастеризацияланған һөт етештереләсәк. Алдағы ике йылда предприятиела продукцияның ассортиментын киңәйтеү планлаштырыла.

- Эшкәртеү өсөн һөттө Өфө, Ҡырмыҫҡалы, Нуриман, Ауырғазы һәм Иглин райондарынан килтерәсәкбеҙ, - тип һөйләне "Башҡортостандың һөтсөлөк союзы" коммерция булмаған ойошмаһы рәйесе Илдар Фәйзуллин. - Киләсәктә сеймалды бөтә республиканан һатып алырға ниәтләйбеҙ. Әҙер продукцияны Башҡортостан буйынса, тәү сиратта Өфөлә, Стәрлетамаҡта һәм Нефтекамала һатыу планлаштырыла.

# ИНКЛЮЗИВ БЕЛЕМ БИРЕҮ

**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында быйылдан башлап "Инклюзив белем биреүҙе ойоштороу" йүнәлеше буйынса магистрҙар әҙерләү программаһы эшләй башлаясаҡ һәм уның буйынса 15 бюджет урыны бүленәсәк. Был көндәрҙә баш ҡалала булып үткән практик семинар ошо инклюзив белем биреү мәсьәләләренә арналды.**

Баш ҡалала барлыҡ балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрҙә сикләүһеҙ белем биреү мөхите булдырыу буйынса эшмәкәрлек алып барыла. Бөгөн 245 балалар баҡсаһының 125-ендә коррекцион-белем биреү эше тормошҡа ашырыла. Үҫешендә төрлө тайпылыштар булған 3 мең самаһы бала, шул иҫәптән 406 инвалид бала квалификациялы ярҙам ала.

Әле ҡала мәктәптәрендә сәләмәтлек мөмкинлектәре сикле - 1836, 714 инвалид бала белем ала. Улар интеллект, күреү, ишетеү, телмәр, терәк-хәрәкәт аппаратының төрлө тайпылыштарына бәйле айырым белем биреү ихтыяжына эйә. 570 бала ғәҙәти кластарҙа, 1266 бала коррекцион кластарҙа уҡый. 32 мәктәп "Доступная среда" дәүләт программаһында ҡатнаша.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Июлдә уҙасаҡ ШОС һәм БРИКС саммиттары алдынан Өфөлә БРИКС-тың Эшлекле советы саралары планлаштырыла. Был турала Бразилиялағы Совет ултырышында һүҙ барҙы. Форумда Рәсәйҙән илдең Сауҙа-сәнәғәт палатаһы президенты Сергей Катырин, Башҡортостандан республика Сауҙа-сәнәғәт палатаһы вице-президенты Азат Фазлыев ҡатнашты.

✓Баш ҡалала Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына урамдарҙы, майҙандарҙы, биналарҙы, йорттарҙы, учреждение һәм предприятиеларҙы байрамса биҙәү буйынса эш дауам итә. Ветерандарҙың "Рәхмәтлебеҙ!" тигән плакаттар өсөн талап ителгән төҫлө фотолары 1 мартҡа тиклем ҡабул ителә.

✓15 февралдә Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналған "Өс мөйөшлө һалдат хаттары" акцияһы башлана. Бөйөк Ватан һуғышы осоро хаттарын һаҡлаған кешеләр тарихты һаҡлауға үҙ өлөшөн индерә ала. Акцияла ҡатнашыу өсөн өс мөйөшлө хат авторы тураһында мәғлүмәт битен тултырып, frontovoe_pismo@mail.ru электрон почтаһына хаттарҙың күсермәләрен ебәрергә кәрәк. Материалдар 2015 йылдың 22 июненә тиклем ҡабул ителә.

✓Өфөлә тағы ла йәрминкәләр гөрләй. Бөгөн һәм иртәгә республика райондарынан килгән ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәр халыҡҡа үҙ тауарын тәҡдим итә.

✓Муниципалитет ҡарарына ярашлы, дөйөм белем биреү учреждениеларында уҡыусыларҙы йылы аш менән тәьмин итеү хаҡтары билдәләнде. 1-4-се кластар өсөн бер балаға иртәнге аш - 45 һумдан, төшкө аш - 55 һумдан, икенде ашы 16 һумдан кәм булырға тейеш түгел. 5-11-се синыфтар өсөн был суммa 50; 60; 17 һумдан кәм түгел. Льготалы категория өсөн ташламалар ҙа ҡаралған.

✓16-һынан 22 февралгә тиклем - Масленица байрамы аҙнаһы. Өфөлә ул 21-22 февралдә һәр районда үтәсәк. Байрам майҙансыҡтарында аттарҙа йөрөү ойоштороласаҡ, күңел асыу программалары тәҡдим ителәсәк һәм, әлбиттә, ҡоймаҡ менән һыйлаясаҡтар!

✓Башҡортостан Республикаһының Милли китапханаһы "2015 йылға балалар уҡыуҙары етәкселәре өсөн иҫтәлекле даталар исемлеге" махсус йыйынтығын баҫтырып сығарҙы.

✓ *Чемпионатта ҡатнашыусы ике команда мәктәп директорҙары етәкселегендә килгән, был Әбделмәмбәт ауылы мәктәбе директоры Инсур Утарбаев һәм Дим биҫтәһенең 120-се урта белем биреү мәктәбе директоры Ирек Усманов.*



*БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫНДА*



# УЙНАП ҠЫНА БҮЛӘК ОТ!

**Баш ҡалабыҙҙың Республика иҡтисад лицей-интернатында мәктәп уҡыусылары араһында математика буйынса Бөтөн Рәсәй олимпиадаһының төбәк-ара этабы үтте. Уның сиктәрендә "АЛИМ" интернет-олимпиадаһы проекты ла күрһәтелде.**

Республика иҡтисад лицей-интернатының информатика уҡытыусылары - физика-математика фәндәре кандидаты Руслан Исаев һәм педагогика магистры Дим Шәйәхмәтов етәкселегендә робот техникаһы һәм информатиканың төрлө йүнәлештәрен өйрәнеү, үҫтереү ниәтендә булдырылған "ALTAIR" лабораторияһы йыл да яңы ҡаҙаныштары менән һөйөндөрә. Әлеге көндә лаборатория өс төп йүнәлеш: олимпиада программалары, ғәмәли сиселеш бүлеге, робот техникаһы буйынса эшләй. Был лаборатория Республика иҡтисад лицей-интернаты уҡыусыларына төрлө идеяларын ғәмәлгә ашырырға ярҙам итә. Шундай яңылыҡтарҙың береһе - математика, логика, информатиканы үҙ эсенә алған, ижади ҡараш талап иткән "АЛИМ" интернет-олимпиадаһы. Ул төрлө компьютер уйындарынан тора. Уҡыусы шул уйындарҙы уйнап, төрлө мәсьәләләр сисеп, балл йыя, артабан ҡатнашыусылар араһында рейтингтар билдәләнә. Был олимпиадала 5-10 синыф уҡыусылары ҡатнаша ала. Рәсәй кимәлендәге бүтән төрлө интернет ярыштарынан айырмалы рәүештә "АЛИМ" бушлай үткәрелә.

Әйткәндәй, булып үткән интернет-олимпиадала Башҡортостандан һәм сит өлкәләрҙән меңдән ашыу бала ҡатнашҡан. Абсолют еңеүсе тип Баймаҡ районы Йомаш ауылынан 9-сы синыф уҡыусыһы Мәрйәм Юнысбаева табылған, уға ойоштороусылар тарафынан ҡиммәтле бүләк - iPhone тапшырылған. Шулай уҡ Мишкә районынан Дарья Александрова (5-6 синыф уҡыусылары араһында) һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Нурзилә Ғәскәрова (7-8 синыф уҡыусылары араһында) үҙ категорияларында беренселекте яулаған. Әлеге көндә "ALTAIR" лабораторияһында шөғөлләнгән Республика иҡтисад лицей-интернаты уҡыусылары "АЛИМ" - 2015 олимпиадаһы өсөн тағы ла мауыҡтырғыс, зирәклек талап иткән яңы уйындар уйлап табыу өҫтөндә эшләй. Улар 7 апрель старт аласаҡ ярыштың тәүге турына әҙерләнә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Оҙайлы ваҡыт компьютер артында төрлө уйындар уйнап, интернет селтәрендә аралашып ултырырға күнеккән баланы был ғәҙәтенән бер нисек тә арындыра алмайбыҙ икән, уға ваҡытын файҙалыраҡ үткәреү өсөн "АЛИМ" кеүек проекттарҙа ҡатнашырға тәҡдим итергә була. Сөнки был интернет-олимпиаданың ҡағиҙәләре ҡәҙимге компьютер уйындарынан артыҡ айырылмай, шул уҡ мауыҡтырғыс эштәр бирелә, ҡыҙыҡлы геройҙар, сослоҡҡа, зирәклеккә, уйлап эшләүгә ҡоролған мәсьәләләрҙе сисергә тура киләсәк. Тиҫтерҙәре өсөн ошондай файҙалы бәйге ойошторған лицей уҡыусыларына яңы ижади үрҙәр, асыштар теләргә генә ҡала.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ ӨСӨН ТҮЛӘҮ



**"Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль Законға ярашлы, ата-әсәләрҙең мәктәпкәсә балалар учреждениелары өсөн түләүенең йөкмәткеһенә һәм асылына етди үҙгәрештәр индерелде. Элекке редакцияла ул баланы ҡарауҙың барлыҡ сығымдары күләменән сығып иҫәпләнеп, уларҙың дөйөм күләменең 20 процентынан күберәк булырға тейеш түгел ине.**

Ҡануниәттәге үҙгәрештәр дөйөм сығымды ике өлөшкә бүлә: белем биреү өсөн сығымдары һәм балаларҙы ҡарау һәм тәрбиәләүгә киткән сығымдар. Беренсе төркөм бынан һуң ата-әсәгә ҡағылышлы булмаясаҡ. Бары тик икенсе статья ғына ата-әсә елкәһенә һалына. Законда билдәләнеүенсә, ул 100 процент булыуы ла ихтимал (мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларының ҡарамағында).

2015 йылдың 1 ғинуарынан Өфө өсөн ата-әсәләрҙең түләү суммаһы нормативтың 45 проценты, йәғни балалар баҡсаһында 12 сәғәт булыу өсөн 106 һум күләмендә билдәләнгән. Уларҙың 75 һумы аҙыҡ-түлек алыуға, 7 һумы учреждениеның матди-техник базаһын нығытыуға, 24 һумы хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡына китәсәк.

Республика бюджетынан ата-әсәләрҙең баланы ҡарау һәм тәрбиәләү өсөн түләүенең бер өлөшөн ҡаплауға субвенция бирелә. Ул Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы йыл һайын 1 апрелдә билдәләгән уртаса түләүҙән сығып, беренсе балаға - 20, икенсе балаға - 50, өсөнсө балаға 70 процент күләмендә иҫәпләнә. Инвалид балаларҙың, етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙың, туберкулез интоксикацияһы булған балаларҙың ата-әсәләре түләүҙәрҙән тулыһынса азат ителә. Бындай льгота менән 1500 ата-әсә файҙалана. Шулай уҡ 50 процент ташлама менән өс йәки унан күберәк balиғ булмаған бала тәрбиәләгән, ғаиләлә йән башына уртаса килем йәшәү минимумынан түбән булған ғаиләләр, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында уҡытыу-ярҙамсы һәм хеҙмәтләндереү персоналы булып эшләгән ата-әсәләр файҙалана. Бөгөнгә улар 8 мең кеше иҫәпләнә.

# РОБОТТЫ ҮҘЕҢ УЙЛАП ТАП!



**Баш ҡалабыҙҙа Белем биреүсе робот техникаһы буйынса I республика чемпионаты үтте. Унда Өфө, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Мәләүез, Нефтекама, Яңауыл ҡалаларынан 130-ҙан ашыу мәктәп уҡыусылары ҡатнашты. "Робот техникаһы буйынса иң яҡшы инженер" исеме өсөн 86 команда ярышты, "Иң яҡшы педагог" исеменә 29 уҡытыусы дәғүә итте.**

Башҡортостанда робот техникаһы буйынса чемпионаттар быға тиклем дә уҙғарылғаны бар. Был йүнәлешкә ҡыҙыҡһыныу 2011 йылда арта, тәүге ярыштар 2012 йылда үткәрелә башлай. Робот техникаһын популярлаштырыуҙа уларҙың роле бик ҙур, сөнки был хәрби роботтар һуғышына тартым чемпионаттар балаларҙа һәр ваҡыт ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Башҡортостанда тәүге асыҡ чемпионат "Хәрби роботтар үҙәге" БР балалар һәм үҫмерҙәр робот техникаһы студияһы тарафынан ойоштороla. Артабан Өфөлә республика кимәлендәге ярыштарҙан тыш, WRO халыҡ-ара бәйгеһенең төбәк этаптары уҙғарыла. Белем биреүсе робот техникаһы буйынса I республика чемпионатында иһә, тәү сиратта мәктәп уҡыусыларында техник мәсьәләләрҙе сисеүгә ижади ҡараш тәрбиәләү, белем биреү методикаһына иғтибар бүленә.

Республика башҡорт лицей-интернаты, Республика иҡтисад лицей-интернаты һәм "Крокус" белем биреү үҙәге тарафынан ойошторолған был чемпионатта "Сумо", "Траектория", "Кегельринг", "Лабиринт", "Алгоритм" кеүек традицион ярыштарҙан тыш, педагогтар "Башҡортостан Республикаһында белем биреү буйынса робот техникаһы үҫеше проблемалары һәм перспективалары" темаһы буйынса фекер алышты. "Башҡортостанда һуңғы ике-өс йылда робот техникаһына ҡарата ҡыҙыҡһыныу артҡандан-арта бара. Ата-әсәләр ҙә балаларына техник белем алыуға өҫтөнлөк бирә. Шуға күрә, был чемпионатта педагогтар араһында тәжрибә уртаҡлашыу, фекер алышыу өсөн түңәрәк ҡор үткәреү ҙә ҡаралды. Әйткәндәй, чемпионатта ҡатнашыусы ике команда мәктәп директорҙары етәкселегендә килгән, был Әбделмәмбәт ауылы мәктәбе директоры Инсур Утарбаев (Бөрйән районы) һәм Дим биҫтәһенең 120-се урта белем биреү мәктәбе директоры Ирек Усманов. Был да бик яҡшы күрһәткес, тип уйлайым", - ти "Крокус" белем биреү үҙәге директоры Вадим Вәлиуллин.

- Һәр төрлө заман техникаһы - ул ижад емеше. Шуға күрә, буласаҡ инженерҙар үҙ шөғөлдәренә ижади ҡараһын тиһәк, мәктәп йылдарында уҡ быға иғтибар бүлергә кәрәк. Робот техникаһы буйынса түңәрәктәр үткәрелгән төрлө мәктәптәр тарафынан башланғысыбыҙ хуплау табыуы ҡыуандыра, - ти Республика Башҡорт лицей-интернатының информатика һәм робот техникаһы уҡытыусыһы Марат Әхмәтшин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Япония кеүек алға киткән илдәрҙәге үҫеш кимәленә, кешенең хеҙмәтен еңелләштереү өсөн уйлап табылған яңы машиналарға ҡараһаң, яҡын киләсәктә бөтөн эште лә роботтарға ҡушып буласағы тураһындағы уй хыял ғына булып та күренмәй кеүек. Был ысынбарлыҡ булып тойола. Шулай булғас, беҙгә лә, донъянан артта ҡалмайыҡ, тиһәк, балаларыбыҙҙы робот техникаһы, заманса технологияларҙы ҡулланыу ғына түгел, уны үҙең уйлап табыу, эшләү менән мауыҡтырып үҫтерергә кәрәк. Ошондай чемпионаттар үткәрелеүе, үҙ сиратында, мәктәп уҡыусыларына һәм педагогтарға тәжрибә уртаҡлашыу, артабан сәмләнеп, дәртләнеп, яңы идеяларын тормошҡа ашырыуға бер нигеҙ ул.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Дауалаусы ванна

❖ Нервыларҙы тынысландырыу, йоҡоһоҙлоҡтан ҡотолоу өсөн үлән ванналары ҡабул итегеҙ. 350-әр грамм розмарин үләне менән йүкә сәскәһе, 300 г әремгә 4 литр һыуыҡ һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һуңынан утҡа ҡуйып, 5 минут талғын ҡайнатырға. Һөҙөргә, ванналағы һыуға өҫтәп, 20-30 минут һыуҙа ятырға. Был дауаны йоҡлар алдынан эшләргә кәрәк.

## Тынысланыу өсөн

❖ Күңел тыныслығын ҡайтарыу өсөн үләндәр эсеп алыу ҙа файҙалы. 50-әр грамм бәйғәмбәр тырнағы сәскәһе менән мәтрүшкә, 30 г еҙтөймә (пижма) үләнен бергә ҡушып болғатығыҙ. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 2-3 ай дауамында көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

## Йоҡлай алмаһағыҙ...

❖ 3 өлөш ҡомалаҡ тубырсыҡтары, 2 өлөш ҡаҙаяҡ (папоротник), 1 өлөш лавр япрағын марлянан тегелгән мендәргә тултырығыҙ һәм йоҡлаған урынығыҙҙа баш осона элеп ҡуйығыҙ.

❖ Тигеҙ өлөштә ҡара сәй менән аҡ сәскә үләнен болғатығыҙ. Йоҡлар алдынан 1 ҡалаҡ аҡ сәскәле сәйгә 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәп, 5 минуттан эсергә.

## Быуындар һыҙлағанда

❖ Был шифалы майҙы артрит, артроз, шулай уҡ быуындар һыҙлағанда, арҡала ауыртыу барлыҡҡа килгәндә һөртөргә. 300 мл медицина һәм 10 мл камфара спирты, 10 төймә анальгин дарыуы, 10 мл йодты яҡшылап бутарға ла 21 көн ҡараңғы урында тоторға. Ҡулланыр алдынан болғатырға.

## Йүткереү

❖ Йүткереүҙе баҫыу, бронхит, трахеитты дауалау өсөн айва ҡулланығыҙ. Ярты литр йылымыс һыуға 5-10 г айва орлоғон һалып, масса ҡуйыра башлағансы һелкетергә. 30 минут төнәткәс, тәменсә бал өҫтәргә һәм сәй итеп эсергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр, ашар алдынан хәлегеҙ яҡшырғансы эсегеҙ. Йүткереүҙе банан дауалай. 2 ныҡ бешкән бананды эмаль һауытта иҙеп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, болғатырға һәм бер аҙ талғын утҡа ҡуйып йылытырға. Бал өҫтәргә һәм йотомлап эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Әле инде был йола байрамы бик һирәк урындарҙа ғына күҙәтелә. Байрамды тергеҙеп, киң таратып ебәргәндә, башҡорт халҡы ҡабул итә алмаған башҡа милләт байрамдарын көсләп индереү ихтыяжы булмаҫ ине.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БОЛАН ДА...
## изге йәнлек

**Башҡорт халыҡ ижадында болан күктән төшкән һәм ҡояш культы менән бәйле булған изге йәнлек. Ғәйнә башҡорттарының легендаһында һөйләнеүенсә, ике һунарсы - Әйнә менән Ғәйнә боланға атланып, Тол йылғаһы үҙәненә һунарға китә һәм убыр әбей мәмерйәгә биклэп ҡуйған ҡояшты иреккә сығара.**

Ҡояшты мөгөҙөнә элеп, болан Тол йылғаһының арьяғына сыға һәм уны һауаға ебәрә. Мөгөҙөнә ҡояш элгән болан образы башҡа халыҡтарҙың мифологияһында ла сағылыш тапҡан.

Ҡайһы бер ғалимдар билдәләүенсә, "күк болан" тигән эпитет йәнлектең төҫөнән бигерәк, уның күк һәм күк тәңреһе менән бәйле булыуын аңлата. Ноғайҙарҙың ышаныуҙарында йәшен менән бәйле күк иблисе "сазаган" болан сүрәтендә булған. Лингвистик һәм фольклор материалдары күрһәтеүенсә, ул башҡорттар һәм бүрәттәргә лә таныш. Башҡорт телендәге "һаҙаған"/"һаҙағай" һүҙе ялағайҙы белдерә. Бүрәт мифологияһында Сагадай тигән күк аллаһы бар. Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районында йәшәгән ҡарттар бөгөн дә, ерҙе болан үҙенең мөгөҙҙәре менән тотоп тора, тип һөйләй. Был боронғо космогоник мифтың ярсыҡтары булыуы ихтимал. Болан донъяның мифологик моделе төҙөлөшөндә ҡатнашып, күкте ерҙән өҫкә күтәргән һәм йыһан киңлегендә ҡаты ер булдырған булһа кәрәк.

Башҡорт легендалары һәм мифтарында боландың кешегә, кешенең боланға әүерелеүе хаҡындағы сюжеттар осраһаны юҡ ине. Әммә 2004-2005 йылдарҙа Силәбе өлкәһе башҡорттары араһында үткәрелгән фольклор тикшеренеүҙәре ваҡытында "Аҡ болан" тип аталған легенданың ике варианты яҙып алынған. Унда әйтелеүенсә, был ерҙәрҙә Шығыр исемле ҡарт һунарсы йәшәгән, ул боланға әүерелә алған. Бер ваҡыт ул киңйә улы менән һунарға киткән. "Тиҙҙән һинең алдыңа бер төркөм боландар килеп сығыр, уларҙың юл башлап барыусыһына атма, ҡалғандарына ғына ат", тигән кәңәш биреп, боландарҙы эҙләп китә. Оҙаҡ көткән малай йоҡлап китә һәм ҡапыл болан аяҡтары тауыштарын ишетеп, һикереп тора ла, юл башлап килеүсе аҡ боланға атып ебәрә. Был аҡ болан уның атаһы булып сыға. Ғилми әйләнештә шулай уҡ ҡыҙ-болан да осрай. Әйткәндәй, башҡорт һунарсылары һунарға барған саҡта бер ҡасан да боланға барам, әйтмәгән, ә уны ситләтеп, "кыр һыйыры" тип йөрөткән. Был күренеш болан кеше телен аңлай, тигән ышаныу менән бәйле.

"Урал батыр" эпосында йылан батшаһы улы Зәрҡүм иң сибәр һәм ҡыйыу кеше сүрәтенә әйләнеү өсөн боланды йотоурға тырыша. Былы эшләү менән ул, ысынлап та, кешегә әүерелә. Ни өсөн йыланға, кешегә әйләнеү өсөн тап боланды йоторға кәрәк булған һуң? Боландың үҙе кешегә әүерелеү һәләте менән бергә, был сифаттың башҡа йәнлектәргә, шулай уҡ йыландарға бирә алыу мөмкинлеге бар, тигән ышаныу булғандыр, моғайын.

Төштә болан күрһәң, ҡунаҡ килә, тиҙәр, бында ла боланды кешегә тиңләү күренеше ята. Икенсе яҡтан, "Ялыҡ бей, Ҡармасан менән Сәрмәсән" дастанында Ялыҡ бей үҙенең киңйә улын "Аҡ болан" тип атай.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

**Оҙайлы ҡыш тамамланып, яҙ миҙгеле башланыу осорон һәр милләт үҙ байрамдары менән ҡаршылай. Төрки телле халыҡтарҙың "Науруз"ы ла, урыҫтарҙың "Масленица"һы кеүек байрамдар ҙа башлыса көн менән төндөң тигеҙләшкән ваҡытында билдәләнә. Башҡорт халҡының да тап ошо мәлдә генә үткәрә торған йолаларын хәтеребеҙгә төшөрөп алайыҡ әле бөгөн. Түбәндә яҙылғандарҙан сығып, сценарий төҙөп, үҙебеҙсә, башҡортса ойошторайыҡ ҡышты оҙатыу, яҙҙы ҡаршылау байрамыбыҙҙы.**

# ҠЫШТЫ ОҘАТЫП,
## яҙҙы ҡаршылап



**"Өлөшкә саҡырыу" байрамы.**

**Мал аҫырап йәшәгән башҡорт халҡында борон-борондан ит бешереп ҡунаҡ саҡырыу йолаһы киң таралған. Ҡар төшөү менән "Һуғым ашына саҡырыу", яҙға табан баш-тояҡ бешереп саҡырыу, ҡар ирей башлағас, "Өлөшкә саҡырыу" байрамдары ойошторолған. "Өлөшкә саҡырыу" байрамы киң таралған булһа кәрәк, сөнки "өлөшөңдө ашатма", "өлөштән мәхрүм ҡалма", "үҙ өлөшөн үҙенә насип булһын", "тәғәйен өлөшөңдө бүлмә" кеүек әйтемдәр әле лә йыш ҡулланыла.**

Халҡыбыҙҙа йәйгелеккә ит һаҡлауҙың төрлө ысулдары уйлап табылған: ҡаҡлау, тоҙлау, туң майға әүәләү кеүек ысулдар булған. Әммә был ысулдар өсөн, нигеҙҙә, иттең һөйәкһеҙ өлөштәре файҙаланылған, ә һөйәкле өлөшө ҡалған. Шуға күрә, яҙға табан йылҡы, һыйыр кеүек эре малдарҙың һөйәкле иттәрен өлөшләп бешереп ҡунаҡҡа саҡырыуы булғандар. Әле инде был йола байрамы бик һирәк урындарҙа ғына күҙәтелә. Байрамды тергеҙеп, киң таратып ебәргәндә, башҡорт халҡы ҡабул итә алмаған башҡа милләт байрамдарын көсләп индереү ихтыяжы булмаҫ ине, сөнки "Өлөшкә саҡырыу" байрамы, ғәҙәттә, ҡар ирей башлағас, боронғоса Яңы йыл тыуыр алдынан (март аҙаҡтарында-апрель баштарында) үткәрелгән һәм туйындырған-кейендергән малға ҡарата бик матур теләктәр әйтелгән. "Күк үләнгә имен аяҡ баҫылды, малдар теүәл генә йөрөһөн", "Тояҡлы малың ишле булһын", "Бер баш мал урынына ике баш мал тыуһын", "Икенсе йыл ошо ваҡытта тағы ошо байрамды үткәрергә насип булһын", "Алдағы йылға тиклем теүәл булайыҡ" һәм башҡа шундай матур теләктәр әйтелгән.

*(Байрамға әҙерләнгән саҡта уҡ кемдәргә саҡырыу тураһында килешергә кәрәк: күрше ауылдымы, ситтә йәшәгән туғандарҙымы, бер урам икенсеһенме. Һәр хәлдә, байрамда һыйлаусы хужалар һәм ҡунаҡтар була. Ә инде конкурс-ярышта барыһы ла берҙәй ҡатнаша. Байрам барышы, конкурс шарттары тураһында матур итеп алдан яҙып ҡуйыла).*

Байрам былай үткәрелә: ҡапҡаға сығып, алыҫтан килгән ҡунаҡтарҙы ҡаршы барып алыу булмай. Һәр йорт алдына йәки тәбиғәт шарттарына ҡарап Мәҙәниәт һарайында тәғәйен урында өҫтәл әҙерләнә. Аш-һыуға, малға ҡарата матур теләк йәки мәҡәл (әйтем) яҙып эленә. Хужалар һыйламаға алдан әҙер була, ҡунаҡтар үҙҙәрен саҡырған хужаларҙың өҫтәле янына килә. Төп алып барыусы байрам башланыуы тураһында иғлан итә, байрамдың асылын ҡыҫҡаса аңлата, ҡунаҡтарҙың ҡайҙан саҡырылыуын әйтә, байрам менән ҡотлай һәм: "Ә хәҙер, әйҙүк, хужалар ҡунаҡтарығыҙҙы өлөш менән һыйлағыҙ!" - тип, байрамды башлап ебәрә.

Борондан ҡалған йолаларҙың төп талаптары шул: өлөштә оло кешеләр булә. Алдарына алъяпҡыс бәйләгән килендәр һурпа өләшә.

Аралар, бер-береһенән айырылып торһон өсөн, һәр ара һыйлаусыларына бер иштән үҙенсәлекле алъяпҡыстар һалыу, бер төҫтән ҡыя яулыҡ бәйләү отошло була.

Байрамдың асылы: йомшаҡ ите киҫеп алынғандан тороп ҡалған һөйәкле итте тигеҙ генә өлөштәргә бүләләр. Был өлөш, ғәҙәттә, өлкәндәргә - ҡуш йоҙроҡ, бала-сағаға һыңар йоҙроҡтай була. Һөйәкле иттең һурпаһы ныҡ һеҙөклө була, шуның өсөн, ғәҙәттә, был һурпаның һөҙөгөн айырым һауытҡа һөҙөп алып, тоҙ, һарымһаҡ, һуған, борос һалып, айырым ултыртҡандар (тоҙлоҡ, һөҙлөктөң башҡаса аталыуы ла ихтимал), ә һурпаһында бишбармаҡ бешергәндәр; самалап айырым бүленеп алынған һурпаға аҙ ғына тары ярмаһы һалып ҡайнатып һәм ҡоротлап (ҡоротло һурпа) айырым биргәндәр.

Өҫтәлгә ит бәлеше, сәмбүсә, ваҡ бәлеш, ҡаҙылыҡ, тултырма, баш ите, тояҡ һереләге (холодец) кеүек иттән әҙерләнгән башҡа төрлө ризыҡты ла ҡуйырға мөмкин. Өлөш алған һәр кеше алдағы йылда ла малдың ишле булыуын теләп, хужаға рәхмәт һүҙҙәре әйтә.

Һыйлау тамамланғас, борон әйтеш, сәсәнлектә ярыш, ҡурай уйнап, оҙон көйҙәр йырлап, сәсәндәр икенсе төбәктәрҙән ишетеп отоп алған йырҙарын башҡарып ултырыр булған. "Күңырбуға" эпосынан, мәҫәлән, Аҡһаҡалдың ит өлөшө таратыуы ошондай һүҙҙәр менән оҙатылып бара:

*Баш һөйәге - башлауға ,*
*Туларһығы - ташлауға,*
*Һум ите - ашауға,*
*Һөйәк алһаң - кимерергә,*
*Елек тапһаң - һурырға,*
*Кимерсәге - сәйнәргә,*
*Быныһы була муйыны,*
*Ете була быуыны;*
*Алғы умыртҡа өләшлә,*
*Өләшлә ҡул килешле;*
*Ете киҫәк, ете быуын,*
*Ала белһәң, үҙеңә;*
*Артҡы умыртҡа ун ике,*
*Ала белһәң, һинеке.*
*Һүҙең башла олонан.*
*Кесенең тот ҡулынан.*
*Олоға юл бирерһең,*
*Кесегә ҡул бирерһең,*
*Башын алыр атайың,*
*Ботон алыр ағайың.*
*Ҡарындашың - аяғын,*
*Еңгәң алыр тояғын.*
*Унан килә һигеҙгүҙ,*
*Һигеҙгүҙгә һигеҙ һүҙ;*
*Һүҙ айышы ырыуҙа ,*
*Ырыулы ил ырыҫлы.*
*Ырыулы ил – уҙғаны,*
*Ырыуһыҙ ил – туҙғаны.*

Табында ултырғанда ғына ни тиклем ҡиммәтле һүҙҙәр әйтелгән, уларҙы тыңлап ултырыусыларға күпме һабаҡ бирелгән.

Былдай табындарҙа балалар өсөн дә төрлө ярыш, уйын ойошторолған. Беҙҙең заманда иһә һәр төрлө уйын, ярыш, викторина ойоштороу өсөн мөмкинлектәр тағы ла кинерәк. Ойоштороусылар үҙҙәренең ижади һәләтлеген ҡолас йәйеп файҙалана ала. Ярышыу өсөн шарттарҙы урында хәл итергә кәрәк. Урам менән урам, ара менән ара йәки бер нисә йорт бер булып команда менән команда араһында ярыш ойошторола.

**КОНКУРСТАР:**

**Һыйлы өҫтәл конкурсы.** Конкурс шарттары: милли ризыҡ төрҙәре, биҙәлеше. Һыйлау барышында йолаға тоғролоҡ. Ауыҙ-тел ижады конкурсы: йомаҡтар, мәҡәлдәр, әйтемдәр, таҡмаҡтар, малға ҡағылған иң матур теләктәр әйтеү.

**Һорауҙарға яуаптар.** Һорауҙар малдың йәшенә, төҫөнә, атамаһына, ит өлөшөнөң атамаһына, *(ҡабырға ите, баш ите, билдәмә, салыу һөйәге, үпкә-бауыр, һум ите, ҡатлансыҡ, ҡарта, туҡ эсәк һ.б.)*; мал һуйғанда ҡулланылған ҡорамалдарға *(бысаҡ, ҡайраҡ, ит таҡтаһы, ит түмәре һ.б.)*; мал салыу оҫталығының нимәгә ҡарап билдәләнеүенә *(ни өсөн ҡайһы берәүҙәр салған мал ите татлы, йомшаҡ була, икенселәренеке - ҡаты, татһыҙ. Мал салыу оҫталығы нимәгә бәйле?)* ҡағыла, бында зирәклектә, тапҡырлыҡта ярыш үткәрергә кәрәк.

Ярышта ҡатнашҡан һәр өҫтәл бер концерт номеры әҙерләй.

Тәҡдим ителгән йолаларҙы, һорауҙарҙы, уйын төрҙәрен урындағы ижад төркөмө менән байытырға мөмкин.

**Байрам символы:** ағас һауыт - алдырайҡ, ҡоштабаҡ (диаметры кәмендә 50-60 сантиметр). Былдай һауыт элек-электән муллыҡ, байлыҡ билдәһе булған. Һауыттың тирәсенә сәмәр йәки һәр ырыуҙың, араның, төбәктең үҙ тамғаһы ырып һалына. Өлөш өҫтәлдәргә алдырайҡта ҡуйыла.

Йомғаҡлау концерты мәҙәниәт һарайында, клубта үткәрелә. Конкурсты концерт номерҙары араһындағы ярыш менән дауам итергә мөмкин.

Концерт барышында һорауҙарға яуаптар алыуҙы тотош тамашасылар менән үткәрергә лә, сәхнәгә һәр аранан вәкилдәр саҡырып сығарырға ла мөмкин.

Һайлап ҡуйылған баһалама ағзаларының төрлө аранан булыуы отошло була.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**
**(Дауамы 11-се биттә).**

✓ *Йыр сәнғәте менән бер рәттән башҡорттар көй ҙә ижад итә. Инструменталь сәнғәт вокалға ҡарағанда өҫтөнлөклөрәк. Һәр йыр көйөнә уның инструменталь варианты була.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*




# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһөн

**Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**

### Гәрәйҙәр йәшәгән ерҙәр

Гәрәй ырыуына ҡараған башҡорттар тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ҙур территорияларҙа көн күрә. Улар тарафынан нигеҙ һалынған ауылдарҙың күп өлөшө бөгөнгө көндә Татарстандың Аҡтаныш районында урынлашҡан. Башҡортостандың Краснокама районы башҡорттарының да төп өлөшө гәрәйҙәр. Шулай уҡ был ырыу вәкилдәре Илеш, Ҡалтасы райондарында йәшәй. Яңауыл һәм Тәтешле райондарындағы 20 ауылдың тамырҙары ошо ырыуға барып тоташа. Гәрәйҙәрҙең аҫаба ерҙәре тарихи Башҡортостандың төрлө тәбиғи-хужалыҡ төбәктәрен биләй. Ил-гәрәйҙәр Ағиҙел йылғаһының һыубаҫар тугайҙарында, урман-гәрәйҙәр Бөрө өйәҙенең төньяғындағы ылыҫлы урмандарында көн күрә. Ил-гәрәйҙәр үҙ сиратында түбәләргә, араларға бүленә. Уларҙың Бәләбәй, һуңынан Бөрө өйәҙенә ҡараған Йәнъегет, Бөртөк, Минзәлә өйәҙенә ҡараған Әзәкүл һәм Таҡталысыҡ түбәләре була. Һуңғы икеһе бөгөнгө көндә Татарстан Республикаһында тороп ҡалған.

Башҡортостан Республикаһының Үҙәк архивында һәм Рәсәй дәүләт архивының боронғо акттар бүлегендә ошо ырыуҙың аҫабалыҡ хоҡуғын раҫлаған документтар һаҡлана. Мәҫәлән, 1674 йылда Әзәкүл түбәһе башҡорто Уразай Тоҡаев (Аҡтаныш районының Уразай ауылына нигеҙ һалыусыларҙың береһе) Һөтлө күленә хужа булырға хоҡуҡ ала. Ғөмүмән, ошо осорҙа "оберегательный" грамоталар күп башҡорттарға бирелә. Башҡорттарҙың аҫаба ерҙәренә күпләп татарҙарҙың, урыҫтарҙың, мариҙарҙың, удмурттарҙың күсенеп ултырыуы быға сәбәпсе була.

Шулай итеп, гәрәйҙәр, башҡорт йәмғиәтенең социаль-сәйәси мөнәсәбәттәренең ҡатмарлы төҙөлөшөнә йәлеп ителгән клан системаһы булараҡ үҫә. Башҡорт ырыуҙары араһында ҡалғас, улар башҡа ырыуҙарға хас сифаттарҙы үҙләштерә. Был тәү сиратта хәрби ойоштороуҙа һәм ер хужалығында сағыла. Ошо төҙөлөш сиктәрендә клан ер мөнәсәбәттәренең ойошоу субъекты функцияһын үтәп тора, ә община башҡорт аҫабалығының гаранты була. Әммә был система емерелеү менән этник төркөмдәрҙең милли-мәҙәни һыҙаттары ла үҙгәрә башлай. Аҫабалыҡ хоҡуғы сикләнеү менән гәрәйҙәр типтәрҙәр, Ҡаҙан татарҙары, мишәрҙәр менән яҡынлаша, бер нисә тиҫтә йыл эсендә уларҙың этник үҙаңы үҙгәрә. Ассимиляция процесы һуғыштан һуңғы йылдарҙа тағы ла нығыраҡ көсәйә. Шулай уҡ ассимиляцияға Иҙел-Урал буйы мосолмандары өсөн уртаҡ булған төрки теленең ике өлөшкә, рәсми әҙәби телдәргә бүленеүе лә ҙур йоғонто яһай. Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты татар һәм башҡорт телдәре араһында бүленеп ҡала. Күпмелер ваҡыттан татар теле итеп ҡарала башлай.

### Балыҡсы ырыуы. "Балыҡсы" этнонимының килеп сығыуы

Билдәле булыуынса, башҡорттарға башҡа төрки халыҡтар кеүек үк клан, ырыу системаһы хас була. Уның сәбәбе Төрөк һәм Хазар ҡағанаттары, Дәште Ҡыпсаҡ, Алтын Урҙа осорҙарына ҡайтып ҡала. Бөгөнгө көндә тикшеренеүселәргә Алтын Урҙа сәйәси ойошмаһының төҙөлөшө яҡшы билдәле. Был дәүләттә йәмғиәттең төп ойошмаһы булып ырыу тора, башҡаса ул аймаҡ, ил, иләү тип тә йөрөтөлә. Башҡорттарҙа ҡырҡлаған ырыу була. Уларҙың күптәре Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң үҙ исемдәре менән аталған улыстар барлыҡҡа килтерә. Был улыстар араһында Балыҡсы улысы ла була. Был турала XVII быуаттарҙағы документтарҙа тәү башлап телгә алына. Балыҡсы ырыуының тамырҙары ҡайҙан? Түбәндә беҙ ошо һорауға яуап бирергә тырышасаҡбыҙ.

Иң тәүҙә академик Р. Кузеевтың гипотезаһына туҡталып китәйек. Ул ырыуҙың "балыҡсы" этимологияһының "рыболов" мәғәнәһе менән ауаздаш булған бөтә фараздарҙы ла инҡар итә. Был субэтноним тағы ла ҡаҙаҡтарҙа, тываларҙа, төркмәндәрҙә, ҡырғыҙҙарҙа булыуын иҫәпкә алып, ул: "Күп осраҡта башҡорттарҙың, ҡаҙаҡтарҙың, ҡырғыҙҙарҙың хужалығында балыҡсылыҡ киң урын алып тормаған, йәки бөтөнләй булмаған. Балыҡ культы менән бәйле боронғо күҙаллауҙар тураһында ла рудименттар юҡ", - тип, ул, был этноним боронғо башҡорттарҙың хужалыҡ шөғөлөнә бәйле, тигән фекерҙән баш тартырға саҡыра. Шуға күрә лә, "балыҡсы" субэтнонимының килеп сығыуын, ул "baliq" тигән боронғо төрки һүҙе менән бәйләй. Төрки яҙмаларының орхон ҡомартҡыларында был һүҙ "ҡала" мәғәнәһендә ҡулланыла. Ҡол Тегиндең (685-731 йылдарҙа йәшәгән Күк Төрки ҡағанатының билдәле ғәскәр башлығы) яҙмаларында "тожу балыкда сүнүшдіміз..." (Беҙ Тоғу ҡалаһы янында алыштыҡ) тигән һүҙҙәрҙе табабыҙ. Билдәле ҡаған хөрмәтенә яҙылған яҙмала Бишбалыҡ та (Биш ҡала мәғәнәһендә) телгә алына. Шулай уҡ төрки һәм монгол ханлыҡтарының баш ҡалалары ла Урҙа-балыҡ (Орду-балыҡ) һәм Хан-балыҡ атамаларын йөрөтә. XI быуатта йәшәгән төрки филологы һәм тел белгесе Мәхмүт Ҡашғари үҙенең "Диван лөғәт әт-Төрк" тип аталған хеҙмәтендә: "Балыҡ - мәжүсиҙәрҙең һәм уйғурҙарҙың телендә "ҡәлғә, ҡала" тигән мәғәнәлә ҡулланыла. Ошо һүҙҙән уйғурҙарҙың иң ҙур ҡалаһы булған Бишбалыҡ атамаһы килеп сыға", - тип яҙа.

Ул замандағы "baliq" һүҙенең бөгөнгө балыҡ тигән мәғәнәһе менән Урта быуат яҙмаларында ҡулланылған мәғәнәһендә ниндәй бәйләнеш бар?

Академик С.П. Толстов әйтеүе буйынса, "baliq" "ҡала" һәм "балыҡ" мәғәнәләрендә ҡулланылған ике осраҡта ла, -bal- тамырына ҡайтып ҡала. Мәхмүт Ҡашғари, "балыҡ" Аргу тигән төрки ҡәбиләлә быҫраҡ тигәнде аңлата, ти. Балсыҡ һүҙе лә ошо уҡ тамырҙан. Урта Азияла ҡалалар балсыҡтан төҙөлә, шуға күрә лә уларҙы балыҡ тип йөрөтәләр. Балыҡ (йылға йәнлеге мәғәнәһендә) шулай уҡ төпкөлдә йәки балсыҡта ята. (Төрөк телендәге "balčyranmaq" һүҙе лә ошо уҡ тамырҙан, батҡаҡ менән буяныу, тигәнде аңлата, башҡорт телендә беренсе фонема төшөп ҡалыу сәбәпле, "быҫраныу", тип әйтелә). Шулай уҡ славяндарҙың "блато", урыҫ телендәге "болото" һүҙҙәре лә ошо тамырҙан.

Әйтелгәндәрҙән сығып, Р. Кузеев, "балыҡсы" субэтнонимының килеп сығыуы тураһында түбәндәгесә һығымта яһай: "Телгә алынған аналогиялар һәм күсенеп йөрөүсе халыҡтарҙа (башҡорттарҙа, тываларҙа, ҡаҙаҡтарҙа, ҡырғыҙҙарҙа, төркмәндәрҙә) был һүҙҙең күп телгә алыныуы әлеге этнонимдың боронғо төрки тамырлы булыуы хаҡында һөйләй. Балыҡсы, балыҡсылар боронғо ҡалалар ситендә йәшәгән күсенеп йөрөгән халыҡтар булыуы мөмкин. Уларҙың вазифаһы, ҡалаларҙы тышҡы дошмандарҙан һаҡлау булған", - тип яҙа. Ҡайһы бер тарихи параллелдәр академикты ошондай һығымта яһауға этәрә. X быуат ғәрәп тарихсыһы әл-Мәғсүди, IX быуатта Арал диңгеҙенең төньяғында ике төрки коалиция араһында ҡупҡан һуғыш хаҡында бәйән итеп, талашыусы ике яҡтың береһендә баджнак, баджгурд (йәғни башҡорт), йәжни, нәүкәрдә ҡәбиләләрен һанап китә. Һуңғы атама фарсы телендә "яңы ҡала" тигәнде аңлата. Р. Кузеев: "Нәүкәрдә яңы ҡалаларҙа йәшәгән кешеләрҙе аңлатҡан кеүек үк, балыҡсы ла боронғо ҡалаларҙың ситендә йәшәгән, ултыраҡ тормош алып барған йәки күсенеп йөрөгән ҡәбилиләрҙе аңлатҡан", - тигән һығымтаға килә. Артабан ул башҡорт этнонимы булған "ирәкте" йәки "ирәктеләр" субэтнонимы менән сағыштырыу яһай. Ҡаҙан ханлығы сығанаҡтарында "ирәк" һүҙе "ҡәлғә", "кремль" мәғәнәһендә ҡулланыла, шуға күрә лә "ирәкте" "ҡәлғәлә хеҙмәт алып барыусы"тигәнде аңлата. Шулай итеп, "нәүкәрдә", "ирәкте", "балыҡсы" терминдары ҡалаларҙы һаҡлау буйынса хеҙмәт итеүсе айырым кешеләрҙе аңлатыуы мөмкин.

Шулай итеп, был гипотезаның мотлаҡ шарты булып ҡалаларҙың булыуы тора. Ул саҡта балыҡсылар ниндәй ҡалаларҙы һаҡлаған һуң? Академик Кузеев Ете йылға (Семиречье) буйы ҡалалары тигән фараз яһай. Әммә әлеге осорҙа ҡалалар бөгөнгө Башҡортостан территорияһында булыуы тураһында оноторға ярамай. Раил Кузеев үҙ хеҙмәттәрен яҙған ваҡытта ул ҡалалар хаҡында артыҡ мәғлүмәттәр, тәрән тикшеренеүҙәр булмай. Бөгөнгө көндә өйрәнелгән материалдар беҙгә киңерәк фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирә. Археологик тикшеренеүҙәрҙән, Урта быуаттарҙа йәшәгән сит ил тарихсыларының, сәйәхәтселәренең хеҙмәттәрен өйрәнгәндән һуң, беҙ тулы ышаныс менән Өфө урынындағы ҡала хаҡында һүҙ йөрөтә алабыҙ. Шулай итеп, әгәр Р. Кузеевтың балыҡсы ырыуының килеп сығыуы хаҡындағы фаразы дөрөҫ булһа, ул заман әлеге ырыу вәкилдәренең ата-бабалары гарнизон хеҙмәтте Башҡортостан территорияһында булған ҡалаларҙа үтәүҙәре хаҡында әйтеп була.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Сәнғәт һәм фольклор

Шулай уҡ башҡорттарҙа өзләү йәки тамаҡ ҡурайы - бер башҡарыусының ике тауышҡа йырлау сәнғәте лә бар. Нигеҙҙә улар яңғыҙ йырлаған, күп тауышҡа йырлау күҙәтелмәй.

Йырлау өсөн уңайлы ваҡыт, бигерәк тә йәйләүгә сыҡҡанда - кис. Хәйер, башҡорттар ялан-ҡырҙа, юлда көндөҙөн дә йыр һуҙа. Кискеһен шулай уҡ төрлө йыйындарҙа, байрамдарҙа, туйҙарҙа яңғыҙ йырлайҙар. Ҡайһы берҙә йырсыны икенсе тауыш күтәреп ала, әммә күмәкләп йырлағандарын ишетмәнем.

Йыр сәнғәте менән бер рәттән башҡорттар көй ҙә ижад итә. Инструменталь сәнғәт вокалға ҡарағанда өҫтөнлөклөрәк. Һәр йыр көйөнә уның инструменталь варианты була.

Башҡорттарҙың милли уйын ҡоралдары араһында ҡумыҙ менән ҡурай киң таралған. Ҡумыҙ ике төрлө: ағас ҡумыҙ һәм тимер ҡумыҙ. Был инструменттарҙың ҡайһыһында уйнағанда ла уйнаусы уны тешенә терәп, ирене менән ҡымтып, ағас ҡумыҙҙың теленә бәйләнгән епте тартып йәки тимер ҡумыҙҙың теленә бармағы менән таптып, көй сығара. Ағас ҡумыҙ бик ябай һәм Башҡортостанда бик һирәк кенә осрай. Ул, нигеҙҙә, ҡатын-ҡыҙ уйын ҡоралы тип һанала һәм ир-ат унда бик һирәк кенә уйнай.

Башҡорттар өсөн икенсе хас уйын ҡоралы - ҡурай. Ул нигеҙҙә айыу ҡурайы тип аталған үләндән яһала. Бының өсөн тигеҙ, шыма һәм эсе таҙа булған үҫемлек һабағы алына. Унда биш тишек уйыла: уларҙы дүртеһе ҡурайҙың аҫ яғынан ике бармаҡ араһындай арауыҡ ҡалдырып тишелә, бишенсеһе ҡапма ҡаршы яҡтан, дүртенсе уйымдан бер нисә сантиметр өҫтәрәк эшләнелә. Ҡурайсы **(һүрәт)** ҡурайҙы киң яғы менән тештәре араһына ҡуйып, өҫкө осоноң яртыһын ирене менән ҡаплай, икенсе яртыһын теле менән ҡыҫа, ә бармаҡтары менән тишектәрҙе алмашлап баҫҡылай. Х. Әхмәтов, Ә. Харисов, Л. Лебединский билдәләүенсә, ҡурайҙың төрлө регистры төрлө тауыштар рәтен бирә.



Ҡарт, ҡоро ҡурайҙы уйнар алдынан йылы һыуҙа сылатып алалар. С. Г. Рыбаков билдәләүенсә, ҡурай тауышы моңло була һәм башҡорт көйҙәренең лирикаһын тулыһынса аса. Башҡорттарҙың һәр көйөнөң барлыҡҡа килеүе тураһында хикәйәт йәки легендаһы бар. Был уйын ҡоралында, нигеҙҙә, ир-ат уйнай, әммә инструментта яҡшы уйнаған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа осрай.

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында өс ҡыллы музыка ҡоралы - думбыра ла бар. Был улар өсөн хас түгел, күрәһең, ҡаҙаҡтарҙан килеп ингәндер.

Башҡорт бейеүҙәре бер ни тиклем үҙенсәлеге менән айырылып тора. Улар хәрәкәттәре менән йырҙағы һүҙҙәрҙе әйтеп бирергә тырыша. Ысынлап та, ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙ ҙа ҡатнашҡан башҡорт бейеүҙәре артыҡ йәнлелеге менән айырылмай. XIX быуатта ғына, рустарҙың йоғонтоһо аҫтында билдәле "Перовский" кеүек марш төрөндәге бейеү көйө үҫеш алыуы уға йәнлелек өҫтәй һәм хәрәкәттәргә аныҡлыҡ индерә.

✓ *Беҙ, дуҫтар үҙ-ара һуғышырға, көрәшергә тейеш түгел, тип барабыҙ һәм урындарҙы шыбаға тотоу ярҙамында хәл итәбеҙ. Дуҫтарына ҡаршы көрәшергә тура килһә, күп спортсылар шулай итә.*

*ӘЙҘӘ, СПОРТСЫ БУЛАЙЫҠ!*

**Ҡатнаш ҡағиҙәле ярыш төрҙәре ("бои по смешанным правилам") тип атап йөрөтөлгән көрәш сәнғәте тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр. Күптәр был спорт төрөн "ҡағиҙәһеҙ ярыш" тип тә белә. Ләкин был ярыш әллә күпме һуғыш төрҙәре ҡағиҙәләрен, техникаһын, мәктәбен үҙ эсенә ала, шуға күрә уны "ҡағиҙәһеҙ ярыш" тип атау дөрөҫлөккә тап килмәй, ти белгестәр. Боронғо гректарҙың Олимпия уйындарындағы панкратион көрәшенән үк башланғыс алған һәм уҙған быуаттың 90-сы йылдарында АҠШ-та Лас-Вегас ҡалаһында казино бизнесы ярҙамында тергеҙелгән ҡатнаш ҡағиҙәле һуғыш төрө һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә лә, Башҡортостанда ла киң таралыу яулай. Күп тапҡырҙар донъя чемпионы исемен яулаған Федор Емельяненко ла, милләттәшебеҙ, шулай уҡ күп һуғыш төрҙәренән донъя чемпионы Венер Ғәлиев та ошо спорт төрө менән шөғөлләнә икәнен дә беләһегеҙҙер. Бөгөн редакциябыҙға легендар Венер Ғәлиевтың уҡыусыһын - панкратион буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары призеры, Волга буйы федераль округы чемпионы, ушу-саньда буйынса республика чемпионы Зәһир ТҮЛӘБАЕВты саҡырҙыҡ. Әңгәмә барышында геройыбыҙ "Нисек спортсы булырға?" тигән һорауға үҙ яуабын бирер, еңеү төшөнсәһенә лә үҙенсәлекле ҡарашын ишеттерер, балаларҙы, үҫмерҙәрҙе, йәштәрҙе спортҡа ылыҡтырыу юлдары тураһында фекерҙәре менән дә уртаҡлашыр.**

# СПОРТТА ЛА ДУҪЛЫҠ БАР ҺӘМ...

## ул "Еңәм" тигән сәмдән көслөрәк

**▸ Һәр үҫенте тамырынан һут ала. Тамыры ныҡ икән, киләсәге лә өмөтлө. Тамыр ныҡ икән, ауырлыҡтар ҙа еңелерәк үтелә. Һин ҡайһы яҡтарҙан? Тыуған яғың, туғандарың һинең спортҡа ылығыуыңа ниндәйҙер кимәлдә йоғонто яһағандыр бит?**

- Әлбиттә, яһаны. Ейәнсура районының Күгәрсен ауылында тыуғанмын. Атайым Илдус - Күгәрсен, ә әсәйем Минзәлә - Саҙалы ауылынан. Атайым - экскаваторсы, әсәйем уҡытыусы минең. Әле әсәй хаҡлы ялда, ә атай Себерҙә эшләй. Атай менән әсәй беҙгә: "Үҙегеҙҙе һәр ерҙә лә матур, ышаныслы тотоғоҙ, һәр эште аҙағынаса еткереүҙе ғәҙәт итеп алығыҙ", - тип өйрәтте. Тамыр тигәндәй, ата-әсәнең һаулығы баланың һаулығына туранан-тура тәьҫир итһә лә, спортсы булыр өсөн (мин төбәк, ил кимәлендәге спортсы булыу тураһында һүҙ алып барам) ата-әсәңдән күскән көс, йылғырлыҡ ҡына етмәй. Юғиһә, тоталар ҙа: "Был кешегә барыһы ла еңел бирелә - уның ҡанында бар", - тиҙәр. Мәҫәлән, спорт менән әүҙем шөғөлләнгән Дағстан егеттәре тураһында ла шундай фекер йөрөй. Йәнәһе, улар тәбиғәттән мыҡты кәүҙәле. Ә мин улар менән йыш осрашып, аралашып йөрөгән кеше булараҡ, ул егеттәрҙең ғәжәп тырыш, эшһөйәр, маҡсатҡа ынтылыусан булыуына, спортзалдарҙа үҙҙәрен йәлләмәй, тирләп-бешеп күнекмәләр яһауына һәр саҡ һоҡланып ҡарайым. Улар тап ошо сифаттары арҡаһында шундай юғары үрҙәр яулай ҙа инде. Һин теләһә ҡайһы милләт вәкиле бул, алдыңа алғанды үтәй торған ғәҙәтең бар икән - уңышҡа өлгәшәһең.

Үҙемә килгәндә, мәктәптә уҡыған сағымда уҡ спорттың ниндәй төрҙәре буйынса түңәрәктәр бар - бөтәһенә лә йөрөргә тырыштым. Атап әйткәндә, саңғыға, волейболға, лаптаға йөрөнөм. Бәләкәй саҡтан төрлө һуғыш төрҙәренә ҡыҙыҡһыныуым ҙур булды. Ҡапсыҡҡа ҡом тултырып, "груша" эшләү булһынмы, тимер-томорҙар йыйып, уларҙы күтәреү булһынмы, ҡышын саңғыла йөрөү булһынмы - береһе өсөн дә ваҡытымды йәлләмәнем. Тимер-томорҙан штанга, турник эшләп алдым. Теләк булһа, шөғөлләнер өсөн ҡорамалдар яһауы еп-еңел ул. Беҙҙең ауылда ул саҡта күп егеттәр спорт менән шөғөлләнергә ашҡынып торҙо.

**▸ Ә ҡатнаш ҡағиҙәле һуғыш төрҙәре менән яҡындан танышыуың нисегерәк килеп сыҡты?**

- Өфө автотранспорт колледжына уҡырға ингәс, бушлай дәрестәр биргән спорт секциялары эҙләй башланым. Мәктәптә уҡығанда футбол буйынса ярайһы уҡ оҫтарып алғайным, шуға ла тәүҙә футбол түңәрәктәре эҙләнем. Бәләкәй сағымдан тай боксына ылыҡҡас, уны ла ҡараштырҙым. Тай боксы түңәрәген таптым, әммә түләүле булғас, уға яҙыла алманым. 2008 йылда был түңәрәккә йөрөү өсөн талап ителгән хаҡ ҙур ғына ине. Эҙләнә торғас, "Һуҡмаҡ" хәрби-патриотик спорт клубына тап булдым. Әрме йәшенә тиклемге йәштәрҙе ҡул һуғышына бушлай өйрәтәләр икән. Йөрөй башлағайным, күңелгә ятты ла ҡуйҙы.

Бер саҡ интернетта хәрби самбо буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы, универсаль һуғыш, ҡул һуғышы, ҡатнаш ҡағиҙәле һуғыш төрҙәре буйынса донъя чемпионы, 50-нән ашыу профессиональ ярышта ҡатнашып, 46-һында еңеп сыҡҡан Венер Ғәлиевтың сайтына юлыҡтым. Венер Ғәлиев "Исимотсу" тигән бер клубта күнекмәләр ҙә алып бара икән. Иртәгәһенә үк клубҡа барып, күнекмәләргә яҙылдым. Бар донъяға билдәле спортсыны үҙ күҙҙәрем менән күреүем шул тиклем ныҡ тәьҫир итте. "Исимотсу"ҙа шөғөлләнеүселәр "башлап өйрәнеүселәр" һәм "өйрәнеүҙе дауам итеүселәр" төркөмдәрендә шөғөлләнә ине. Тренер минең әҙерлегемде тикшереп ҡараны ла, "өйрәнеүҙе дауам итеүселәр" төркөмөнә яҙҙы. "Исимотсу"ға аҙнаһына өс тапҡыр йөрөһәм, ҡалған көндәрҙә "Һуҡмаҡ" хәрби-патриотик клубында шөғөлләнеүемде дауам иттем. Венер Ғәлиев клубында һуғыш төрҙәре нескәлектәрен өйрәнһәм, хәрби-патриотик клубта, элеккесә, тимер-томор күтәрҙем, йүгерҙем. Ҡыҫҡаһы, дөйөм күнекмәләр менән булдым. "Исимотсу"ға ла көн һайын йөрөр инем дә, әлеге лә баяғы, уның түләүле булыуы арҡаһында йыш йөрөү мөмкинлеге булманы. Хәйер, зарланырға урын юҡтыр, тип уйлайым, сөнки, Венер Ғәлиев ҡанаты аҫтында бик күп нәмәгә өйрәнеп ҡалдым. "Кроссфит" тигән шәп күнекмәләр ысулы (айырым бер мускулды үҫтереүгә йүнәлтелгән, алмашлап, бер туҡтауһыҙ эшләнә торған 20-ләгән күнекмәне үҙ эсенә алған комплекс) менән ошо клубта таныштым. Хәҙер иҫләйем дә, хайран ҡалам: Венер Ғәлиев беҙгә спорттың файҙаһы тураһында әллә күпме һөйләп тә, фәлсәфәүи темаларға әңгәмәләр үткәреп тә ултырмаған, ә һабаҡты спорт күнекмәләре ярҙамында һеңдергән икән. Венер ағай Екатеринбург ҡалаһына күскәс, күп кенә егеттәр һымаҡ уҡ, был клубты ҡалдырырға тура килде: остазыбыҙ булмағас, унда артабан шөғөлләнеүҙең мәғәнәһен күрмәнем.

Былтырҙан алып талантлы тренер, Башҡортостан Республикаһының Панкратион федерацияһы президенты Радмир Хәйруллин етәкләгән "Комбат" клубында шөғөлләнәм.



**▸ Ниндәй ярыштарҙа ҡатнаштың?**

- Бөтәһе егермегә яҡын ҙур ярышта ҡатнашҡанмындыр. 2013 йылдың декабрь айында булһа кәрәк, Өфөнөң "Динамо" спорт комплексында "Комбат" самооборона буйынса Бөтә Рәсәй асыҡ турниры үткәргәйне. Төркмәстандан, Тажикстандан, Ҡаҙағстандан, Ҡарасәй-Черкес, Дағстан республикаларынан бик көслө командалар килгәйне. Мин Дағстандан килгән Низам Рамазанов исемле егеткә ҡаршы сыҡтым. Матур алыш күрһәттек. Ауырттырыу ысулын ҡулланғайным, тамашаны ҡараусылар шул тиклем дәррәү алҡышларға, миңә маҡтау һүҙҙәре ҡысҡырырға кереште. Етмәһә, һигеҙ мөйөшлө рингта һуғышыу үҙе үк дәрт бирҙе, рухты күтәреп ебәрҙе. Был осрашыуҙа Дағстан егетенән мәрәйҙәр буйынса ҡалышып, еңелдем. Һуғыш самбоһы буйынса Дағстан чемпионы икән үҙе. Ярыштан һуң Низам менән дуҫлашып киттек.

Ошо ярышта тағы бер спортсыға ҡаршы сығырға тура килде. Бер минут ярым самаһы ваҡыт үткәс, ул миңә типкән сағында тегенең аяғынан тотоп алып, уң яҡтан һуғып, йығылттым да, аяғын тартып, ауырттыра торған алым ҡулландым. Һөҙөмтәлә, еңдем тегене. Шулай итеп, бөтә Рәсәй турнирында өсөнсө урынға лайыҡ булдым.

Тағы бер ҡыҙыҡлы осрашыу тураһында һөйләйем әле, булмаһа. Былтыр яҙ айҙарының береһендә панкратион буйынса республика чемпионаты үткәйне. Ике дәғүәсене еңдем дә, финалға дағстанлы дуҫыма - Низамға ҡаршы сыҡтым. Ләкин беҙ финалда һуғышып тормабыҡ - көрәштек тә, бөттө. Беренсе урынды - уға, икенсе урынды миңә бирҙеләр. Шунан Волга буйы федераль округының панкратион буйынса ярышына әҙерләнә башланыҡ. Ул март айы тирәһендә Татарстанда үтте. Унда ике версия бар. Береһендә - мин, икенсеһендә Низам беренсе урын алды. Бер версияла еңгәс, финалға сыҡҡан дағстанлы дуҫыма ҡаршы көрәшеп тә тормай бирелдем. Һуңғы арала республика кимәлендәге ниндәй ярышта ҡатнашһаҡ та, финалға Низам менән бергә сығабыҙ. Беҙ, дуҫтар үҙ-ара һуғышырға, көрәшергә тейеш түгел, тип барабыҙ һәм урындарҙы шыбаға тотоу ярҙамында хәл итәбеҙ. Дуҫтарына ҡаршы көрәшергә тура килһә, күп спортсылар шулай итә. Кемдәрҙер һуғышмайынса ғына көрәшә. Бер-береңә һуҡмайһың, төртмәйһең - еңелсә генә көрәш күрһәтәһең. Ул сағында, кемгә уңыш йылмая - шул еңә инде.

**▸ Ниңә быңдай аяуһыҙ спорт төрөн һайланың? Ҡул һуғышын, аңлауымса, бушлай секция булғаны өсөн һайлағанһың...**

- Миңә электән тай боксы оҡшай торғайны, тигәйнем инде. Тай боксы ла бик аяуһыҙ спорт төрө бит. Сөнки бында сикләүҙәр аҙ. Сикләүҙәр ни тиклем аҙ - шул тиклем хәүеф тә күберәк. Ни тиклем хәүеф күп, ул спорт миңә шул тиклем нығыраҡ оҡшай.

**▸ Ә һин кемгәлер зыян эшләп ҡуйырһың, йәки үҙең имгәнермен, тип ҡурҡмайһыңмы?**

- Ундай уйҙар ҙа була, әлбиттә, әммә ҡурҡыуға тиклем барып етмәй. Шуның өсөн дә күнекмәләр эшләргә кәрәк. Әгәр уйланып, хәүефләнеп, түшәктә тик ятһаң, бер нигә лә өлгәшә алмаясаҡһың, әлбиттә. Һине алып ташламаһындар, һиңә типмәһендәр, һуҡмаһындар өсөн бары тик күнекмәгә иртәрәк барырға, һуңыраҡ ҡайтырға кәрәк. Беҙ көн һайын күнекмә үтергә тырышабыҙ. Күнекмәләр миңә ышаныс өҫтәй. Һәр ярышта ҡатнашҡан һайын ышаныс арта. Шулай ҙа, күнекмә - бер, ә ярыш - бөтөнләй икенсе нәмә. Күп кеше күнекмәлә яҡшы һөҙөмтә күрһәтә, ә ярышҡа барһа - ҡалтырап төшә. Минең менән бергә шөғөлләнгән күп спортсыларҙа тулҡынланыу тигән нәмәнең әҫәре лә тойолмай. Ярыш алдынан дәғүәсене нисек алдарға икән, тигән һорау тураһында ғына уйланаһың. Башҡа уйҙар сығып оса. Шуға ла уңышлы сығыштарыбыҙ күберәктер, тип уйлайым. Уйҙарыңды ярыш алдынан нисек көйләйһең - күп нәмә шунан да тора. Еңәм, тиһәң, еңәһең инде. "Еңелерменме икән?" тигән шик тыуһа, әлбиттә, был ҙур етешһеҙлек булып тора. Спортсы бөтөн үҙгәрештәрҙе, яңылыҡтарҙы ла яҡшыға юрап, үҙен ыңғайға көйләргә тейеш. Шул саҡта ғына рух ныҡ була.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Бөгөн беҙ бик аяуһыҙ спорт төрө булараҡ танылған ҡатнаш ҡағиҙәле ярыш төрҙәрен үҙ итеүсе башҡорт егете менән әңгәмәләштек. Егеттең дуҫлыҡты ваҡытлыса ғына була торған еңеү ҡомарынан өҫтөнөрәк ҡуйыуына һоҡландыҡ, шул уҡ ваҡытта уның хәүеф менән хәүефһеҙлек араһындағы күҙгә күренмәҫ сик менән "шаярырға" әүәҫлеген дә үҙ ауыҙынан ишеттек. Нисек кенә булмаһын, был спорт төрөн һайларға теләгән йәштәргә фәһемле һүҙ әйтелде шикелле.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ
әңгәмә ҡорҙо.

✓ *Беҙҙең халыҡ талантлы, күбеһе йыр, бейеүгә маһир. Әммә бындай һәләтебеҙгә беҙ эш тип тә, бизнес тип тә ҡарамайбыҙ. Ә шул уҡ ваҡытта Беренсе каналдан башҡорт йырсыһы йырлап торһа, ҡайһылай шәп булыр ине!*



ТАНЫШ БУЛЫҒЫҘ!

Bashkort 2.0

**Интернет селтәрендәге Bashkort 2.0 проекты Ер шарының төрлө төбәктәрендә йәшәгән, Башҡортостандан йә республиканан ситтәге аҫаба төбәктәрҙән сыҡҡан эшлекле һәм талантлы башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары тураһында һөйләй. Ошо проект аша уҡыусылар үҙенең тырышлығы һәм маҡсатҡа ынтылышы арҡаһында уңыш үрҙәренә өлгәшкән заман геройҙары менән таныша, ә ватандан ситтә йәшәүсе яҡташтар бер-береһе менән табыша.**

# БАШҠОРТ МОҢОН...

## Мәскәүҙә яңғырата улар



**Бөгөн уҡыусыларҙы Мәскәү ҡалаһында йәшәүсе профессиональ музыкант Радмир Муфтахин менән таныштырабыҙ. Радмир Маймонида исемендәге Дәүләт классик академияһында уҡыған сағында уҡ халыҡ-ара бәйге һәм фестивалдәрҙә башҡорт халыҡ көйҙәрен акустик гитарала уйнап, призлы урындар яулай. "Халыҡ көйҙәрен беҙ үҙебеҙ беләбеҙ, яратабыҙ, ләкин уны бит башҡаларға ла ишеттерергә кәрәк. Профессиональ белемем акустик гитара менән бәйле булғас, тап ошо уйын ҡоралында Мәскәү һәм сит ил тамашасыһына милли моңобоҙҙо ишеттерәм. Был үҙ һөҙөмтәләрен бирә - бәйгеләрҙә еңеүем шуны дәлилләй", - ти Радмир үҙе. Ә күптән түгел Мәскәүҙә уның етәкселегендә "Заман" исемле этно-проект барлыҡҡа килде. Радмирҙың этно-ансамбль тураһында хыялланып йөрөгәненә шаһитмын. Илебеҙҙең баш ҡалаһында юғары музыкаль белем алған яҡташтарыбыҙҙы туплау - ҙур эш. Бына шул "Заман" ансамбле былтыр ноябрь аҙағында Ҡазанда уҙған төрки йәштәренең "Тюрквижн-2014" Халыҡ-ара музыкаль конкурсында Башҡортостан данын яҡлап сығыш яһаны ла инде. Һәм егерме бер ил вәкилдәре араһында өсөнсө урын яуланы! Рухлы, маҡсатлы йәш милләттәшебеҙ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**Bashkort 2.0. Радмир, "Тюрквижн" халыҡ-ара музыкаль бәйгенең абруйлы жюри ағзалары ҡуйған юғары талапҡа өлгәшеү еңелдән булмағандыр?**

**Радмир:** Ата-бабаларыбыҙ беҙгә иҫ киткес моң мираҫ итеп ҡалдырған. Ошо мәҙәни байлығыбыҙҙы үҫтереү, бөгөнгө донъя музыкаһы талаптарына тап килтереү, бөтә Ер шары белерлек һәм аңларлыҡ, яратырлыҡ итеп яңғыратыу - беҙҙең бурысыбыҙ. Бына ошо бурысты бер минутҡа ла иҫтән сығармайынса, бәйгегә бик ентекләп әҙерләндек. Бындай форматтағы халыҡ-ара бәйгеләрҙә иң мөһиме - ул йыр. Ҡулға ҡәләм һәм музыкаль ҡорал алыр алдынан коллективыбыҙ менән һуңғы йылдарҙа үткәрелгән бөтә "Евровидение" сығыштарын, былтырғы "Тюрквижн"ды ҡарап сыҡтыҡ. Финалға үткән һәм еңеүсе итеп табылған ҡатнашыусыларҙың йырҙарын барлап, ниндәй йүнәлештә эшләргә кәрәк икәненә төшөндөк. Шунан ғына йыр яҙырға тотондоҡ.

"Тюрквижн" - йәш конкурс, ул 2014 йылда икенсе тапҡыр ғына үткәрелде. Маҡсаты - төрки донъяһының йәш музыканттарын туплап, был бәйгене киләсәктә "Евровидение" кеүек күләмле сара дәрәжәһенә еткереү. Шуға ла сәхнәләге сығышыбыҙҙың төп концепцияһы - ул Европа музыкаһы талаптарына тап килеү. Йырыбыҙҙы беҙ башҡорт моңона таянып, көнбайышта бик популяр булған музыкаль йүнәлештәрҙә (Drum 'n' Bass һәм R&B) ижад иттек.

**Bashkort 2.0. Ни өсөн "Заман" тап этно-төркөм булып ойошто?**

**Радмир:** Быны мин ҡан тартыуы менән аңлатам. Һәр беребеҙҙең күңеле милли моңдо үҙ итә, һәр беребеҙ бығa тиклем үҙ юлы менән бер үк маҡсатҡа килгән. Беҙгә бер-беребеҙҙе табып, шулай бер төркөм булып ойошорға насип булғандыр, күрәһең. Артабан күмәкләп ҙур эштәр башҡарырға ашҡынып торабыҙ. Унан һуң, Мәскәү һынлы Мәскәүҙә заманса эстрада төркөмө менән бергә лә аптыратып та, ниндәйҙер уңыштар яулап та булмаясаҡ. Ә этно-музыка менән хәҙер бар донъя кимәлендә ҡыҙыҡһыналар.

**Bashkort 2.0. Ысынлап та, этно-музыка хәҙер сит илдәрҙә ныҡ популяр. Мәҫәлән, тыва халҡының милли музыка ҡоралдарына ҡушылып өҙләгән "Хуун-Хур-Ту" - Рәсәйҙең сит илдәге иң популяр музыкаль төркөмө һанала. 2006 йылда тыва артистары бөтә донъяла билдәле булған BBC каналының "World Music Award" ("Бөтә-донъя музыкаль премияһы") исеменә дәғүә иткән. Рәсәй кимәлендә этно-музыка шундай популярлыҡҡа эйә була алырмы икән бөрәй ваҡыт, тиген икеләнеү бар, әлбиттә. Гөмүмән, төркөмөгөҙҙөң концепцияһы башҡа музыкаль проекттарҙан ниməhe менән айырыла?**

**Радмир:** Рәсәй эстрадаһында, эйе, көнбайыш артынан эйәреү тигән нәмә көслө шул. Ә шулай ҙа сифатлы милли музыка менән Рәсәй кимәлендә лә үҙ тамашасыңды табып булырына ышанам, ошоға ынтылабыҙ ҙа инде. Шуға ла "Заман" төркөмөнөң маҡсаты - сифатлы музыка барлыҡҡа килтереү. Башҡаларҙан айырмабыҙ - башҡорт халҡының милли үҙенсәлегенә таянып, бөгөнгө көндөң популяр музыкаль йүнәлештәрендә ижад итеү. Милли мәҙәниәтебеҙ бик бай һәм уға быуаттар буйы нигеҙ һалынған. Ошо мираҫты үҫтермәү - ата-бабаларыбыҙ һалған көстө юҡҡа сығарыуға тиң.

**Bashkort 2.0. Һеҙ Рәсәй баш ҡалаһының төрлө мәҙәни сараларында әүҙем ҡатнашаһығыҙ, хәҙер инде ойоштороусылар үҙҙәре үк һеҙҙе эҙләп, саҡыра башланы. Мәскәү тамашасыһы сығыштарығыҙҙы нисегерәк ҡабул итә?**

**Радмир:** Бер миҫал килтереп үтәм. Күптән түгел "Малайзия мәҙәниәте көндәре"нең концерт программаһында сығыш яһарға саҡырғайнылар. Күпте күргән һәм бер ни менән дә аптыратып булмаған Мәскәү тамашасыһы алҡышлап ҡына ултырманы, хатта "Айҙар ғынайым"ды беҙгә ҡушылып йырланы ла. Шул тиклем кинәнес алдыҡ был сығышыбыҙҙан. Бөтә ҡала кимәлендәге "Музыка төнө" сараһында ла "Заман" этно-ансамбле иң сағыуы тип танылды.

**Bashkort 2.0. Коллективығыҙ тураһында һөйләп китһәгеҙ...**

**Радмир:** Ансамблдең составы бер һүрәттең паздары һымаҡ йыйылды. Коллективыбыҙ ағзалары белеме менән дә, үҙҙәренең шәхси сифаттары буйынса ла профессионалдар. Ҡайһы берҙәре менән беҙ күптәнге дуҫтар, ижадташтар, ә ҡайһы берҙәре менән ансамбль формалашҡанда таныштыҡ. Ысын рух, татыулыҡ һәм дәрт арҡаһында беҙ тиҙ арала ҙур уңыштарға өлгәштек.

**Bashkort 2.0. Йыр яҙыу процесын нисегерәк күҙаллатып була?**

**Радмир:** Сәй эсә-эсә, коллективыбыҙ менән бергәләп киләһе йырҙың концепцияһын уйлайбыҙ. Әгәр ҙа башҡорт халыҡ йырына таянабыҙ икән, бер нисә йыр һайлап, уларҙы нисек матур итеп замансалаштырып булыуы тураһында фекер алышабыҙ. Әлфиә исемле йырсыбыҙ ижад ителгән көйҙө диктофонға яҙҙыра. Һуңынан эстафета беҙҙең талантлы композитор һәм профессиональ музыкантыбыҙ Айҙар Хәмзинға тапшырыла. Ул фортепьянола уйнап, киләсәк композицияға үҙ ҡарашын өҫтәп, йөрәге аша үткәреп, музыкаль рәсем төшөрә. Шунан һуң ғына беҙ ҡулдарыбыҙға музыкаль ҡоралдарҙы алып, репетициялар яһайбыҙ. Ошо мәлдә бөлмәлә ысын ижад итеү процесы бара. Күпме уйҙар, күпме тәҡдимдәр! Сәхнәлә иһә тамашасы ошоларҙың һығымтаһын ғына күрә.

Беҙгә ярҙам иткән тағы бер кешене әйтеп үтмәй булмай. Әлфиәнең әсәһе Венера Ниғмәтуллина - һәләтле музыкант һәм белемле филолог. Көйҙәребеҙгә һүҙҙәрҙе ул яҙа.

**Bashkort 2.0.Коллективығыҙ ағзалары башҡа ансамблдәрҙә лә уйнаймы?**

**Радмир:** Әлбиттә, беҙҙең ҡыҙҙар-егеттәр профессиональ белемле музыканттар булараҡ, башҡа юҫыҡтарҙа ла үҫешә, икенсе төркөмдәрҙә сығыш яһарға саҡырыла. Ләкин был беҙҙең ижадҡа ҡамасау түгел, киреһенсә, төрлө музыкаль йүнәлештәрҙә үҙенде һынап ҡарау фекерләү ҡеүәнде байыта, шымарта, тимәк, ижад иткән көйҙәр ҙә уңышлыраҡ яңғыраясаҡ. Йырсыбыҙ, мәҫәлән, билдәле Рәсәй йондоҙҙары менән эшләй, ә музыканттарҙың ҡайһы берҙәре джаз-төркөм составында сығыш яһай.

**Bashkort 2.0. Мәскәүҙә башҡорт моңон таратыусы булараҡ, әйт әле, ни өсөн Рәсәйҙең популяр телевизион проекттарында башҡорт артистары ҡатнашмай? Шул уҡ "Голос" проектын алайыҡ - бөтә ил ял көндәре телевизорҙарына ябырыла. Ошондай сараларҙа ҡатнашыу халҡыбыҙҙың имиджын булдырыуҙа, башҡалар араһында үҙебеҙҙең йөҙөбөҙҙө күрһәтеүҙә ҙур роль уйнар ине...**

**Радмир:** Миненсә, бындай проекттарҙа ҡатнашыуҙың әһәмиәтен күптәр аңламай. Беҙҙең халыҡ талантлы, күбеһе йыр, бейеүгә маһир. Әммә бындай һәләтебеҙгә беҙ эш тип тә, бизнес тип тә ҡарамайбыҙ, етди мөнәсәбәттә түгелбеҙ. Ә шул уҡ ваҡытта Беренсе каналдан башҡорт йырсыһы йырлап торһа, ҡайһылай шәп булыр ине! Бөтә Рәсәй "Мин башҡорт йырсыһы өсөн тауышымды бирәсәкмен, уның йырлауы ныҡ оҡшаны!" тиер ине. Башҡортостан - талантлар иле икәнен әлегә беҙ генә беләбеҙ. Артистың менеджеры йә продюсеры юҡлығы ла бындай дан ҡаҙана торған проекттарҙа ҡатнашыуға ҡамасаулай, әлбиттә. Был йәһәттән ысынлап та башҡорт эстрадаһы ҙур ҡытлыҡ кисерә. Мәҫәлән, "Голос" проекты мөхәррире Мәскәүҙәге "Jazz - Parking" тигән урынға концерттарға йөрөй. Тап шунда ул "Голос" проектына таланттар эҙләй. Шул уҡ ваҡытта асыҡ һайлау туры ғинуар уртаһынан "Останкино"ла уҙғарыла. Кешеләр "бөхетле билет" алырға өмөтләнеп, шунда килә. Ҡатнашыусыларҙың күптән һайланғанын, хатта тәүге тапшырыуҙарҙың төшөрөлә башлауын улар белмәй, асыҡ һайлау туры күҙ буяу өсөн генә ойоштора. Шуға күрә, тәүҙә үҙеңә менеджер йә продюсер табырға, шунан Мәскәүҙә үткән сараларҙа ҡатнашып, кешеләр менән танышырға кәрәк. Стратегия булырға тейеш.

**Bashkort 2.0. Билдәле ҡурайсыбыҙ Роберт Юлдашевтың Мәскәү сәхнәһендә Николай Носков, "Чайф" төркөмө, Пелагея кеүек Рәсәй эстрадаһы йондоҙҙары менән бергә сығыш яһағанын күптәр беләләр. Ә һеҙ кем менән дуэт эшләргә хыялланаһығыҙ?**

**Радмир:** Бөгөн беҙҙең төп бурысыбыҙ - ул үҙебеҙҙең тулы репертуарҙы булдырыу. Әлбиттә, беҙ төрлө тәҡдимдәргә ҡарата һәр саҡ асыҡ. Иң мөһиме, сығыштарыбыҙ гармониялы булһын. Маҡсаттарыбыҙ ҙур инде ул! Алла бирһә, тиҙҙән уларҙың тормошҡа ашыуын күрергә яҙһын!



**Фатима ЯНБАЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**







Мәүлит ЯМАЛЕТДИН

# ТАМАМЛАНМАҒАН ХАТ

Хикәйә

Ғәйшә әбей моңһоу ҙа, татлы ла уйҙарынан арынып, хатын дауам итте: "...Беҙҙә лә халыҡ әкренләп дингә ылыға, намаҙ уҡып, ураҙа тотоусылар күбәйә, Аллаға шөкөр. Мин дә хаҡ динебеҙҙең фарыз ғәмәлдәрен хәлемдән килгәнсә үтәргә тырышыусыларҙың береһемен, әлхәмдулиллаһ. Был ғәмәлдәрҙе башҡарырға дини китаптар, үҙ телебеҙҙә баҫылған мосолман календарҙары ныҡ ярҙам итә. Уның өсөн һеҙҙең кеүек уҡымышлы дин әһелдәренә ҙур рәхмәт инде. Һеҙ сығарған календарҙы ла халыҡ бик яратып уҡый, изге мәнфәғәттәрҙә файҙалана. Тик унда баҫылған яҙмаларҙың бәғзе бер урындарын аңлап бөтмәйбеҙ. Күрәһең, ғилемебеҙ етмәй. Бына, быйылғы календарығыҙҙа: "Иртәнге ашты бер үҙең генә ашау - шайтан менән бергәләп ашау була", - тип яҙылған. Уйлап-уйлап ҡарайым да, шуның айышына төшөнә алмайым. Уны аңламаусылар бер мин генә түгелдер. Ә бит минең кеүек яңғыҙаҡ ҡарт-ҡоро менән донъя тулған. Улар быны үҙҙәренә төрттөрөү тип ҡабул итеп, хурланыуҙары ихтимал..."

Ҡағыҙға төшкән аҙаҡҡы һөйләмдән йәне әрнеп ҡуйған Ғәйшә әбей яҙыуынан тағы туктап ҡалды. Ул һуңғы көндәрҙә үҙенең ғәрлектән, кәмһенеүҙән ауара хәлендә йөрөгәнен иҫенә төшөрҙө. Эйе, яңғыҙлыҡты берәү ҙә теләп алмай - ул һәр кемдең башына төшөүе бар. Ә төптәнерәк уйлап ҡараһаң, яңғыҙлыҡ - әҙәм балаһының булмышына һалынған ҡотолғоһоҙ тәҡдир. Ғүмер тип аталған сәхифә сиктәрендәге ике төп ғәмәл дә был фекергә ҡеүәт - кеше был донъяға яңғыҙ тыуа, япа-яңғыҙ баҡыйлыҡҡа күсә. Туған-тыумаса, хәләл ефет, балалар, дуҫ-иш, шөғөл һәм төрлө мауығыуҙар шул ҡот осҡос тойғонан бер аҙға арыныу, фанилыҡҡа әүрәү сараһы ғына.

Яңғыҙлыҡтан ҡотолоу сараһының иң серлеһе, иң сетереклеһе - әҙәм балаһының үҙ һыңарын эҙләп сәбәләнеүе. Ғүмер эсендә кеше үҙ ишен йә таба, йә юҡ. Уныһы әлеге лә баяғы тәҡдиргә, маңлайына нимә яҙылыуына бәйле.

Ун һигеҙ йәшендә Ишбулатҡа кейәүгә сыҡҡан Ғәйшә донъяла бындай төшөнсәләр барлығын яҙа-йоҙа ғына белә ине. Ололарҙан ишетеүен ишетә йөрөһә лә, тормоштоң әлегә тик сәсәһөн татыған ҡыҙ бала уның әсеһен нисек күҙ алдына килтерһен?

Тыуымышы күрше районда булған Ишбулат Сибай механизацияланған колоннаның бер бригадаһы менән уларҙың ауылына электр үткәрергә килде. Егет әлеге төркөмдә шофер булып эшләй ине. Әрме хеҙмәтендә булып ҡайтҡан һәм арыу уҡ теш ҡаҡҡан Ишбулат ҡаҙҙар араһындағы аҡҡош һымаҡ ауылдың башҡа ҡыҙҙарынан айырылып торған Ғәйшәгә күҙ һалды. Күңеле иләҫ-миләҫ килгән ҡыҙ ҙа уға битараф түгеллеген белдерҙе. Ҡыҫҡаһы, бығаса ҡараңғы булған ауылды балҡытҡан Ильич лампалары менән бергә улар араһында мөхәббәт уты ҡабынды.

Эш өйләнешеү тәҡдименә килеп терәлгәс, егетҡә яуап бирерҙән алда Ғәйшә әсәһенән кәңәш һораны. Ә ул нимә тиһен? Тәүҙә: "Әллә..." - тине, торараҡ: "Үҙең беләһең", - тип өҫтәне. Ире һуғышта ҡорбан булған, ике ҡыҙын яңғыҙы аяҡҡа баҫтырам тип нужа һурпаһын байтаҡ эскән ҡатындың бөтә кәңәше шул булды. Әсәһенең "әллә" тигәнен "бәләнән баш-аяҡ" тип аңларға була ине. "Бар", тип әйтһән, тормошо уңмауы ихтимал. Аҙаҡтан: "Һинең һүҙеңде тыңлап, әрәм булдым", - тип битәрләйәсәк. "Барма", - тиһәң дә ҡыйын, һуңынан кейәү сыҡмай ҡуйһа: "Һинең арҡанда ҡарт ҡыҙ булып ултырам", - тип өҫтәндән өйҙәй буласаҡ. Әсә кешенең "үҙең беләһең" тигәне ризалыҡ биреүгә һаҡ ҡына ишара ине. Йәнәһе, мин ҡаршы түгел, ләкин бер-бер хәл килеп тыуһа, үҙеңә ҡарап үпкәлә.

Ризалығын ситләтеп кенә белдерһә лә, Ғәйшәнең әсәһе эстән ҡәнәғәт ине. Ниңә тиһәң, элек ололар гонаһ шомлоғо итеп күрәҙәлек ҡылған замандар тыуҙы - тирә-яҡта "ул ҡыҙ ата-әсә фатиһаһынан тыш кейәүгә ҡасып сыҡҡан, был ҡыҙ ғәйептән бала тапҡан" тигән хәбәрҙәр ара-тирә ишетелеп тора. Уның ҡыҙы, исмаһам, кәңәшләшә, рөхсәт һорағанын белдерә.

Бар хәл, юҡ ял менән уҙғарылған туйҙан һуң Ишбулат Ғәйшәне үҙҙәренең ауылдарына күсереп алып ҡайтты. Айырым торлаҡ йүнәтеп алғанға ҡәҙәр ҡайны йортонда йәшәргә ҡарар итеп, кейәү егеттең етмештән уҙған ата-әсәһе менән бергә тора башланылар. Ишбулат тәүге йылда совхоздың бер бүлексәһе булған ауылда төрлө эштә йөрөнө, икенсе йылдың йәй аҙағында уны йөк машинаһына ултыртып, урып-йыйыу эшенә ҡуштылар. Ул арала Ғәйшә туптай малай табып алды. Балаға Ишморат тип исем ҡуштылар.

Тормош шулай көйлө генә барғанда, Ғәйшә, баш балаһына ярты йәш тулыр-тулмаҫтан, икенсегә ауырға ҡалды. Һирәкһаяҡ осраған әлеге хәлдең дөрөҫлөгөнә шиге ҡалмағас, ул быны Ишморатҡа әйтте. Йәнәһе, ҡыуандыра. Уныһы һөйөнөр урынға ризаһыҙлыҡ белдерҙе:

- Нимә, бер дәжжәл әҙерәк була тиһеңме?

Иренең был һүҙҙәре Ишмораттың илаҡлығына төрттөрөү ине. Әйтмәксе лә, уларҙың көтөп алған бәпәйҙәре ифрат мыжыҡ булып сыҡты. Бер илай башлаһа, тымыҙып алырмын тимә. Уның әлеге өйәнәгенән бигерәк тә төндә яфаландылар. Бәлки, ниндәйҙер сир тынғыһыҙлап, шуға илайҙыр, тип, совхоз үҙәгендәге дауаханаға алып барып ҡараһалар, бала һап-һау. Әллә берәй табиптар белмәгән ауырыуҙан ыҙалана микән, тип, шундағы "Уржумиха" ҡушаматлы имсе мәрйәнә әмәлләтеп ҡаранылар, ләкин ул да ярҙам итмәне.

Өйҙә ҡалғандарға еңелерәк ине - баланың көндөҙгө йоҡоһонда уларҙың серем итеп алыу форсаты бар. Ишбулатҡа ҡыйын - төнө буйы йүнләп йоҡламаған көйө көн оҙоно эшләргә кәрәк. Етмәһә, кабинала йылы, йән менән тәнде иҙрәтеп мотор геүләй. Ул хатта бер нисә мәртәбә руль артында йоҡлап китә яҙҙы.

Иренең һөйләнеүе бер хәл, Ғәйшәнең йышлап түл йәйеүе ҡәйнәһенә лә оҡшап етмәне. Баяғы хәбәр ҡолағына салынғас, ул аулаҡта былай тип бупылдап алды:

- Ҡуян һымаҡ һулы һайын бала табамы кеше!.. Зат-зәүерҙә булмағанды...

* * *

Эйе, әйтерһең, Ғәйшә үҙен үҙе ауыр аяҡлы иткән. Ғәрлегенән ятып үлерлек!.. Ул үлеүен үлмәне, әммә йәшлек дыуамаллығы арҡаһында бүтәнсә әсә булыу бәхетенән мәхрүм ҡалды. Ишбулаттың ҡәнәғәтһеҙлегенән, ҡәйнәһенең әсе теленән хурланған Ғәйшә тотто ла ҡатындарҙың тоҡҡатын төшөрөү менән аҫтыртын шөғөлләнгән Фатимаға барҙы. Фатима ҡарында уҡ үгәйһетелгән яралғыны төшөрҙө, ләкин уның артынса аҡҡан ҡанды туҡтата алманы. Әгәр шул көндө Ишбулат төшкө тамаҡ ашарға ҡайтмаһа, хәтәр үҙешмәкәрлектең аҙағы ни менән тамамланыры Хоҙай ҡулында ине.

Күп ҡан юғалтыуҙан өҙлөккән Ғәйшә район үҙәгендәге дауаханала байтаҡ ятты. Йәшлек үҙенекен итте - операцияһын да күтәрҙе, реанимацияһын да үткәрҙе. Ғәйшә аяҡҡа баҫты ла, тик уның ғүмерен һаҡлап алып ҡалған табиптарҙың һығымтаһы аяуһыҙ ине: башҡа бала таба алмаясаҡһың!

Ул дауахананан ҡайтҡанда кескәй Ишморат кәзә һөтөнә өйрәнеп, шуның менән йән аҫрап ята ине. Былай бирешмәгән - төҫ-башы тәҙәк. Хатта бер аҙ тулыланып, өлкәнәйеп киткәндәй. Бәлки, оҙаҡһыҙ күрмәгәнгә шулай тойола ғыналыр. Һөйләүҙәренсә, тәүге мәлдә сабыйҙың әсе китеп ыҙалатҡан. Ғәжәп итәһе түгел - кәзә һөтө бит ул! Юҡҡа ғына: "Кәзә һөтө ҡуйы булһа - ҡаймаҡ була ла ҡуя", - тип таҡмаҡ сығармағандарҙыр. Уның әсә һөтөнән башҡаны татымаған ашҡаҙанына күп кәрәкме инде?

Ғәйшә улын өҙөлөп һағынғайны. Ишектән инеү менән "Балаҡайым!" тип ҡулына алырға ынтылһа, уныһы, әллә ятһыныуҙан, әллә оҙаҡҡа ҡалдырып киткәнгә үпкәләүҙән, уймаҡтай ауыҙын бәлшәйтеп, йәлләмес тауыш менән иланы ла ебәрҙе. Күҙенә йәш һауған Ғәйшә сабыйын күкрәгенә ҡыҫты, йөрәк төпкөлөнән сыҡҡан ирҡә һүҙҙәр менән йыуатты, әсәһен танып, ҡапыл шымып ҡалған ғәзиз йән эйәһенең маңлайын, биттәрен үпте, сәстәрен һәм муйынын еҫкәне.

Ул Ишморатты кис булғас ҡына ҡулынан төшөрҙө. Унда ла төшөрмәҫ ине - йоҡоһо килгән сабый иҫнәй башланы, бер-ике тапҡыр мышҡылдап алды.

- Әһә, йоҡо тауышы сыҡты, - тине килене алдында үҙен ғәйепле һиҙеүҙән ни биреп, ни ҡуйырын белмәгән ҡәйнә кеше. - Бына, ошо һөттө имә-имә йоҡлап китә торған... Хәҙер мәм-мәм бирәм. Беҙ инде ҙурайҙыҡ, аҡылландыҡ, төндә иламайбыҙ. Шулай бит, улым?..

Ғәйшә һөтлө шешәгә ҡуш ҡул менән сарт йәбешеп имә-имә әүен баҙарына китеп барған сабыйына байтаҡ ҡарап ултырҙы. Бахырҡай, иҫ кермәҫ борон нужа күреп тә өлгөрҙө. Бәхетең бар икән шулай ҙа - әсәң тере ҡалды. Ә бит бөтөнләй икенсе төрлө булыуы мөмкин ине...

Ошоларҙы уйынан үткәреп, йөрәге һыҙлаған Ғәйшә көрһөндө лә:

- Ҡолонсағым!.. Берҙән-берем! - тип ҡуйҙы.

Һуңғы һүҙҙе ҡәйнәһе оҡшатманы:

- Атаҡ, атаҡ! Берҙән-берем, тип ни! Әле йәшһегеҙ, күнеләңде киң тот...

Ғәйшә йәш тулы күҙҙәрен ҡәйнәһенә төбәп, уны бүлдерҙе:

- Минең бүтән балам булмаясаҡ...

Бер һөрөнһәң - иртәнән ҡара кискәсә, тигәндәй, ошонан һуң күп тә үтмәй, Ишбулат бойҙай урлап тотолдо. Был сакта ураҡтың ҡыҙған мәле ине. Баҫыуҙарҙа һары таңдан ҡараңғы төшкәнгә тиклем комбайндар геүләй, машиналар ырҙын табағына бер туҡтауһыҙ иген ташый.

Энер ҡараңғылығы ҡуйырғанға хәтле эштән бушамаған Ишбулат бер көндө машинаһының кузовында ике тоҡтай бойҙай алып ҡайтты. Ауылда йәшәгәс, ҡош-ҡорт аҫрамаһаң, булмай. Ә уның өсөн ем кәрәк. Әлбиттә, совхоз малдарына аҙыҡҡа тип ҡалдырылған елгәртелмәгән бытырғы бойҙайҙы яҙҙыртып алып була, ләкин уның өсөн былай ҙа наҡыҫ ҡына эш хаҡынан аҡсаңды тотоп алып ҡалалар. Ошондай хәлдә ауылдағы һәр кем, нисек булдыра ала, шулай яйын табып, үҙ йүнен үҙе күрергә мәжбүр.

Ихаталағы ҡош-ҡорт үҙҙәренә Ишбулат тарафынан инселәнгән бойҙайға ике көн генә тейешеп ҡалды. Өсөнсө көндө иртәнсәк уларҙың өйө янына халыҡ "бубик" тип йөрөткән еңел машина килеп туҡтаны. Унан ике кеше төштө. Береһе совхоздың партком секретары, икенсеһе кейеҙ эшләпә кейгән тәбәнәк буйлы, ҡыҫығыраҡ күҙле таныш түгел әҙәм. Был ваҡытта Ишбулат күптән эштә, Ғәйшә йоҡонан яңы уянған бәпәй менән булыша, ҡайныһы төнгөлөккә тышап ебәрелгән атын ҡарарға киткән, ә ҡәйнәһе, әмәлгә ҡалғандай, иркенгә сығарырҙан алда ашатайым тип, ҡаҙҙарға ем биреп йөрөй ине. Теге икәүҙең ҡапҡанан килеп инеүе әбейҙең бер-береһен тапай-тапай ризыҡҡа ынтылған ҡаҙҙарҙың тағарағына бойҙай һалып торған мәленә тура килде.

- Әһә! - тине партком секретары, һаулыҡ-фәлән һорашып тормаҫтан, - бирәм тигән ҡолона - сығарып ҡуйыр юлына, тиҙәрме әле?..

Ғәйшәнең ҡәйнәһе, көтөлмәгән хәлдән тертләп, ҡулындағы алдырын төшөрөп ебәрә яҙҙы. Ахырҙа, албырғауҙан:

- Әле һаумыһығыҙ! - тигән булды.

- Һаубыҙ, һаубыҙ, - тип дауам итте партком. - Бойҙай ҡайҙан?

- Белмәйем. Төнә улым алып ҡайтты, рәхмәт төшкөрө.

Шул саҡта кейеҙ эшләпә телгә килде:

- Ләғнәт төшкөрө тип әйт. Һинең улың - бур, дәүләт милкенә ҡул һоноусы!

Өҫтөнә кинәт боҙло һыу һибелгәндәй тойғо кисергән әбей ҡурҡа төштө. Ҡапыл быуынһыҙға әүерелгән ҡулы ҡалтырап, тотоп торған алдыры тағараҡҡа йомолған ҡаҙҙар өҫтөнә ҡапланды. Үҫмер сағың яуҙан алдағы шомло йылдарға, йәшлегең һуғыш ваҡытына тура килһә, ҡурҡмаҫ ереңдән ҡурҡырһың! Ул хәйерһеҙ йылдарҙа бер ус бойҙай өсөн әҙәмдәрҙең башын төрмәгә тыҡтылар бит... Уй, ҡалай ҡурҡыныс хәбәр һөйләй бынау бәндә, әстәғфирулла! Партком таныш, уныһы, ярай, үҙебеҙҙең кеше. Ә был кем икән? Милиция тиер инең - кейеме оҡшамаған.

Үҙе өсөн түгел, улы өсөн хафаланған әбей, хәлдең ҡырҡыулығын бер аҙ йомшартырға була:

- Ҡустым, һин кем булаһың әле? Танымай торам, - тине, кейеҙ эшләпәгә ҡарап.

Юлдашы өсөн партком секретары яуап бирҙе:

- Ул халыҡ контроле комитетының башлығы, районнан килгән. Улығыҙ бойҙай алып ҡайтҡандың икенсе көнөндә үк ауылығыҙҙан кемдер уға хәбәр иткән. Иптәш шуны тикшереп йөрөй.

Был һүҙҙәрҙән ҡәүҙәһен турайтыбыраҡ ҡуйған район түрәһе үҙе телгә килде:

- Дә-ә... Хәбәр дөрөҫләнде. Эш ҡағыҙҙа ҡалды.

Бынан һуң халыҡ контроле комитеты рәйесе, ҡырт боролоп, сығыу яғына йүнәлде, уның артынан партком секретары эйәрҙе. Ҡурҡыуҙан, шомло уйҙарҙан шаңҡыған әбейҙең ҡолағына уларҙың үҙ-ара һөйләшкән: "факт... акт... совхоз директоры... прокуратура..." тигән айырым һүҙҙәре генә салынып ҡалды...

**(Дауамы бар).**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

# ҠЫШТЫ ОҘАТЫП,

## яҙҙы ҡаршылап

**(Башы 6-сы биттә).**

### Баш ите ашау йолаһы

Көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында һуғым малының башын ҡыш буйына һаҡлап, яҙын ошо башты бешереп, ашҡа сыҡырышыу йолаһы бар. Баш ите һыйырҙыҡы йәки һарыҡтыҡы булырға тейеш. Малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡтарҙа йәшәү көсө - йән башта һаҡлана тигән ҡараш йәшәгән. Шуға ла башҡорттар ҙа малдың йәнен ирекккә сығарыу өсөн баштың аҫҡы яңаҡ һөйәген айырып алғандар. Баш ҡыш буйына туңдырылып һаҡланған. Баш ите ашау йолаһы мәрхүм туғандарҙы иҫкә алыу һәм әрүахтар культы менән бәйле - ырыу-заттың именлеген һорап һәм яҡты киләсәк теләп, әрүахтәргә мөрәжәғәт итеү күренеше халыҡта киң таралған булған. Был йоланың яҙ көнө, малдарҙың ҡырға сығыуы алдынан үткәрелеүе лә символик мәғәнәгә эйә, баш ите ашаған саҡта мал артһын, уңыш бай булһын тип теләнгән.

Малдың башын таҙартып йыуып, бешереп алғас, уны ҡунаҡтарға сығарыр алдынан маңлай өлөшөндә, ҡолаҡтары артында һәм ауыҙ эргәһендә ике яҡтан өсмөйөш киҫектәр эшләнгән. Башты киҫәктәргә бүлгәндә һәр кемгә тәғәйен өлөш сыҡҡан. Ә тел менән ҡолаҡ ите һәр кемгә бирелергә тейеш булған. Белгестәр билдәләүенсә, һәр кемгә өлөш сығарыуҙың нигеҙендә тотемистик ҡараштарға бәйле сәбәптәр ята. Малға, йәнлектәргә табынған кеше ризыҡланыу өсөн уны һуйғас, улар был тыйыуҙы боҙған өсөн кешеләрҙән үс ала башлауҙары ихтимал тип уйлағандар. Шуға ла күп кеше саҡырып, итте улар менән бергә ашап, хайуандарҙы алдайбыҙ, тигән фекерҙә булған. Баш итен ашаған саҡта ҡунаҡтар мотлаҡ рәүештә малдың ишәйеүен теләгән: "Малың ишле булһын, малдың ҡото китмәһен!".

Баш һөйәген ташларға йәки эткә ашатырға ярамаған. Башҡорттарҙа малдың, бигерәк тә йылҡы малының баш һөйәген һәм һарыҡ, мышы мөгөҙҙәрен таяуға ултыртып, тирмә, йорт, мал аҙбары, умарталыҡ янына ҡуйыу шайтандар һәм башҡа яуыз көстәрҙән һаҡлай, тигән ышаныс йәшәгән. Әгәр ҙә малдың баш һөйәген ергә ташлаһаң, малың юҡҡа сығып бөтәсәк, тигәндәр, ҡайһылары бәләнән һаҡланыу өсөн баш һөйәген майлап та ҡуйған.

**Эльза МИҺРАНОВА.**

### Һиҙгерҙәргә - ҡолаҡ ите

Беҙҙең Баймаҡ яҡтарында эре малдың башын һәм тояғын ҡыш буйына туңдырып һаҡлайҙар һәм март айында уны өтөп, таҙартып, баш итенә саҡырышалар.

Беҙ бала саҡта көндәр саҡ ҡына йылынһа, ауылда ҡойҡа еҫе тарала башлағанлығы, әсәйемдәрҙең: "Фәлән кейәүҙәр баш өтөп ята", - тип, ҡунаҡҡа саҡырыласаҡтарын белеп тороуҙары матур хәтирә булып уйылып ҡалған. Ғәҙәттә, баш итенә иң ҡәҙерле, абруйлы, өлкән кешеләрҙе саҡыралар. Малдың башын уртаға ярып бешереп алғас, һурпаһына һалма һалып, аш өлгөртәләр. Үҙенсәлекле тәме менән айырылып торған ризыҡ был. Был йоланың рәт-сиратын белгән берәйһе баш итен өлөштәргә бүлеп, һәр береһенә тарата. Ҡолаҡ итен, һиҙгер булырһың, тип биргәндәрен хәтерләйем. Тел итенә, телсән булырһың, тигән теләк әйтелә. Телдең осон ашаған кешенең теле әсе була, шуға телдең өсөн кемгә бирәбеҙ, тип шаярта инеләр. Баш итенең һәр өлөшө шулай таратыла. Мейеһен ҡалаҡҡа һалып бирә торғайнылар.

**Меңәүәрә БОХАРБАЕВА.**
**Хәйбулла районы.**

### Башҡорттар ҡар өҫтөндә лә көрәшкәнме?

**Башҡорттарҙың спорт тормошон сағылдырған был фотоһүрәт бынан 102 йыл элек, 1913 йылдың февралендә, төшөрөп алынған. Ҡышын ҡар өҫтөндә уҙғарылған милли көрәште сағылдырыуы менән был фотоһүрәт уникаль булып тора.**

Фотоһүрәттән күренеүенсә, көрәш бик ҡыҙыу бара. Көрәш майҙансығын уратып торған Өфө полицейскийҙарына ҡарап, уларҙың судья ролен башҡарыуы хаҡында әйтергә була. Көрәшселәр бер төрлө тун һәм бүрек кейгән. Әллә был ҡыш көнө көрәшеүселәрҙең униформаһы булдымы икән?

Беҙ, әлбиттә, көрәш ярыштары яҙғы сәсеү тамамланғас, һабантуйҙарҙа йәки башҡа йыйындарҙа ғына уҙғарыла, тигәнгә инанғанбыҙ. Әммә төптән уйлап ҡараһаң, башҡорттоң төп спорт төрө булған көрәш ярыштары ни өсөн ҡышын туҡтап ҡалырға тейеш һуң әле? Улар, моғайын, ҡышын да үткәрелә торған булғандыр. Һәр хәлдә, ҡарттар хәтеренең, тарихсыларыбыҙҙың был фотоға аңлатмаһы барҙыр.

Нисек кенә булмаһын, ҡышты оҙатҡан, яҙҙы ҡаршылаған байрам мәлендә малай-шалайҙарҙың, ир-егеттәрҙең ҡар өҫтөндә көрәшен ойоштороу бик матур сараға әүерелер ине. Йә, кемегеҙ ошо фекерҙе хуплай? Һеҙҙән байрам тураһында хәбәрҙәр, фотолар көтәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәтерһеҙгә әйләнеп бөтә яҙҙы бит халыҡ: йырлаһа, йырҙың һүҙен белмәй, туй үткәрәм тиһә, туй йолаларын онотоп бөтә яҙған. Хатта бына ҡышты оҙатыу, яҙҙы ҡаршылау мәлендәге үҙ йолаларыбыҙҙы, үҙ байрамдарыбыҙҙы онотоп, "Наурыз", "Масленица" кеүек байрамдар үткәрә башланыҡ. Беҙҙең күп йолаларыбыҙ үҙебеҙҙең көнкүрешкә, хеҙмәт төрҙәренә, аш-һыуға бәйләнгән икәнен иҫкә төшөрөп, шул йолаларыбыҙҙы байрамдарыбыҙ майҙанына алып сығайыҡ, тимәксе булғайныҡ.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

## САҢЫН ҠАҠТЫҠ...

### ЫҒЫШТЫҢ

**Сыраҡҡа төшөү** - төнөн балыҡ һөҙөү
**Күшерелеп** - өшөп, бөршәйеп
**Балыҡ шаңҡытыу** - башына махсус суҡмар менән һуғып алыу
**"Саңын ҡағыу"** - бик ҡаты тәнҡитләү йәки дөмбәҫләү
**Йырҙа** - йылға аҡҡан соҡор
**Аяғына "таш таҡҡан"** - саҡ атлай, ялҡау
**Үләмһә** - ябыҡ, ит ҡунмаған мал йәки кеше
**Ҡаулан ер** - үләне кипкән урын
**Баҡмал** - бәндәгә бәндә булыу, кеше көнлө
**Былҡыш** - нығынмаған, эшкинмәгән, боламыҡтай
**Алъяу, ярты аҡыл** - ни һөйләгәнен белмәй
**Шалҡы, шапата** - һәр нәмәне түгә-сәсә, эшлекһеҙ
**Шыҡһыҙ** - йәмһеҙ, иләмһеҙ
**Ығыш** - үтә яй, ырамһыҙ
**Әзмәүер** - мыҡты кәүҙәле, көслө
**Заруратан** - аптырағандан, мәжбүри эшләнгән эш-хәл
**Ауанһыҙ** - уны-быны уйламай, яңғыҙ йөрөү
**Ҡый-сый килеү** - талаш, ығы-зығы булыу
**Ҡыйыш башлы** - уйламай һөйләй, эшләй
**Болдалау** - емереү, ватыу, һүтеү
**Бер сыбыҡтан ҡыуылған** - бөтәһе бер иш, айырып алғыһыҙ
**Һиҙәп** - бәләкәй генә төймә
**Кәләп һалыу** - ике арала йөрөү
**Ҫүл, үлек йыйыу** - тәндәге шешкән урындың эренләүе
**Елпеү һуғылыу** - кеше күп ерҙә сир йоғоу
**Жыбытҡы, ебегән** - эшкинмәгән, асыҡ ауыҙ.
**Үжәт** - туймаған аҙғын мал
**Ләжәнкәләп йөрөй** - кейемен йүнәтеп кеймәй, түш-һәше асыҡ
**Бынағыйыш** - аптырау, ғәжәпләнеү
**Кәбәген һепермәгән** - эҙен яҙлыҡтырмаған
**Һыйланмыштан һығылған** - күп ашап эсе ташҡан
**Кәкре ҡабырға** - үсексән, һүҙ күтәрмәй
**Бәйнәт** - торғаны бер бәлә
**Ҡамаҡаш** - тештәрҙең ите (десны)
**Шылғый** - алдаҡсы, ҡасырға ғына тора
**Тәпәрлеш** - бөкләнеп бөткән кейемһалым
**Торжағыны терәлгән** - нығ асыҡҡан
**Баҙ бәбәк** - һәр хәрәкәтте күҙәтә

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**



✓ *Ҡайҙа яҙылды икән? Окоптамы? Землянкаламы, блиндаждамы? Ниндәй шарттарҙа, ниндәй кәйефтә? Нимә тураһында һөйләй улар? Ят яҙыуҙы ҡапылда шытырлатып уҡый алмағаныма күңелем әсене.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЯҺАЛМА ВИТАМИН...

## файҙалы түгел

■ Wi-Fi кеше организмына нисек тәьҫир итә? Был һорауға анығ ҡына яуап биреп булмаһа ла, уның балаларҙың сәләмәтлегенә зыян итеүен ғалимдар раҫлаған да инде. Тикшеренеүҙәрҙең авторҙары билдәләүенсә, балаларҙың мейеһе сымһыҙ электрон ҡоролмалар бүлеп сығарған радиацияға тиҙерәк бирешә. Тыуып өлгөрмәгән балаға ла уларҙың тәьҫире ҙур, шуға ла табиптар ауырлы ҡатындарға кеҫәләрендә телефон йөрөтөргә кәңәш итмәй.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды күпләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витаминының артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витаминының инсультҡа килтереүе асыҡланған.

■ Бер төркөм Америка ғалимдары 15 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡараштa булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы нығыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәрҙә 45-84 йәштәге 5100 кеше ҡатнашҡан. Тән массаһы индексы, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, артериаль ҡан баҫымы кеүек факторҙары менән бер рәттән, уларҙың оптимист йәки пессимист булыуына ла иғтибар иткәндәр. Асыҡланыуынса, оптимистарҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икән.

■ Балыҡ диетаһы яман шештең ҡайһы бер төрҙәренән дә һаҡлай. Ғалимдар билдәләүенсә, бигерәк тә һыуыҡ диңгеҙ һыуҙарында йөҙгән омега-3 майлы кислоталарына бай майлы балыҡтар файҙалы. Ә бына шәхси кешеләр тарафынан фермаларҙа үрсетелгән балыҡ ашауселарҙа яман шешкә ҡаршы тороу һәләте түбән, сөнки яһалма аҙыҡ ашап үҫкәнлектән, был балыҡтарҙа омега-6 майлы кислоталары күберәк. Һуңғыларына һөмбаш ғаиләһенә ҡараған балыҡтар инә. Балыҡтың нисек әҙерләнеүе лә мөһим. Мәҫәлән, тоҙло балыҡ үҙенең профилактик үҙенсәлектәрен юғалта, ә ҡыҙҙырылғаны, киреһенсә, яман шеш хәүефен арттыра, сөнки ҡыҙған саҡта аҙыҡта канцероген аминдар туплана.

■ Милан милли институты ғалимдары белдереүенсә, аҡ икмәк һәм макарон изделиеларын артыҡ күп ашау ҡатын-ҡыҙҙарҙың организмы өсөн зыянлы. 47 мең кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был продукттар йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен 2-3 тапҡыр арттыра. Әммә был үҙенсәлек ир-егеттәргә ҡағылмай, ти ғалимдар. Америка ғалимы Герберт Шельтон раҫлауынса, ике йәше тулмайынса балаларға бөтөнләй аҡ икмәк бирергә ярамай. Дөрөҫөн әйткәндә, эш бында аҡ икмәктә лә түгел. Бойҙайҙан он тарттырғанда уның бөтөн файҙалы элементтары ҡабығында ҡала.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға 70 йыл тулып килә. Илебеҙ Еңеү байрамын тантаналы, киң масштаблы итеп билдәләргә әҙерләнә. Йыл башынан оло юбилейға арнап, бихисап саралар, конкурстар ойошторола. Һуғыш, тыл ветерандары тураһында телевидение, ваҡытлы матбуғат әүҙем мәғлүмәт бирә. Ошо тарихи ваҡиғанан бер кем дә ситтә ҡалғыһы килмәй. Был афәттән һуң 12 йыл үткәс донъяға килгән быуын кешеһе булараҡ, 1941-1945 йылғы ҡан ҡойошто китаптан уҡып, киноларҙан ҡарап ҡына күҙ алдына килтерәм. Хәтирәләрем дә, беҙҙең атай-әсәйҙәр быуынына хас булғанса, аслыҡ, яланғаслыҡ, "ҡара ҡағыҙ" алыу, етемлек кеүек ғүмерҙәренең фажиғәле осорҙарына әйләнеп ҡайтмай. Һуғыш дәүере балалары менән сағыштырғанда, замандаштарымдың йоҡолары ла тыныс. Улар атайлы үҫеүҙәре менән бәхетле. Шуға күрә, 30-40-сы йылғылар кеүек йөрәктәренең иң түрендә йөрөткән, бер ваҡытта ла ауыҙ асып "Атай" тип әйтмәгән һүҙҙәрен төштәрендә генә ҡысҡырып, баҫлығып та уянмай улар. Һуғыш әҙемтәләре һаман булһа ла тыныс йәшәргә бирмәй оло быуын вәкилдәренә.**

# УТЛЫ ЙЫЛДАР ШАҺИТЫ -

## хаттар эҙенән

Башҡа тиндәштәрем нисектер, ә мин ир ҡорона инә барған һайын Бөйөк Ватан һуғышына, немец халҡына ҡарата ҡарашым да, мөнәсәбәтем дә үҙгәрә барыуын тойҙом. Был бигерәк тә Германияла, Ровенсбург концлагерына терәлеп торған урында һалдат бурысын үтәгән осорҙа нығ һиҙелде. Тәүҙәрәк немец халҡы менән яҡындан аралашыуҙан уларҙың мәҙәниәтле булыуы, үҙҙәренә генә хас көнитмеше был халыҡҡа ҡарата ихтирам тойғоһо уятһа, икенсе яғы ла бар ине урындағы халыҡтың. Милләттәр дуҫлығы идеологияһында тәрбиәләнгән совет кешеһе булараҡ, ҡайһы берҙәренең беҙгә ҡарата ыңғай фекерҙә булмауын тойомлау ине ул. Бигерәк тә илебеҙгә ҡаршы һуғышҡан бөйөк рейх һалдаттарын осратып, улар менән шәхсән аралашҡанда, беҙгә - азатлыҡ һалдаттарына, асыҡтанасыҡ "оккупант" тип, йөҙгә бәреп әйткән һүҙҙәре лә тәьҫир итмәй ҡалмағандыр, күрәһең. Шунда асыҡ аңланым "Немец халҡы менән фашизмды бер ҡалыпҡа һалып ҡарамаҫҡа!" тигән хәҡиҡәтте. Хәрби бурысты үтәп ҡайтҡандан һуң үҙебеҙҙең һуғыш һәм тыл ветерандары менән аралашыу, беҙҙең илдә уларға мөнәсәбәт, тыуған яҡ тарихы менән ҡыҙыҡһыныу, яҡташтарымдың яҙмыштары - барыһы ла Бөйөк Ватан һуғышына етди, төплө итеп ҡарарға өйрәтте.

Күптән түгел ике туған һеңлем Гөлзифа: "Ағай, һин тарих менән ҡыҙыҡһынаһың, ошо ҡағыҙҙар әллә ҡасандан ята, һуғыш осоронокo шикелле, хәрефтәре беҙҙенсә булмаған, айышына төшөнөп булмай", - тип, ҙур ғына төргәк һондо. "Һуғыш осороноко", тиеүҙән, ҙур яуаплылыҡ тойоп, "Алырғамы, юҡмы?" тип бер аҙ икеләнеп торҙом. Шулай ҙа ҡыҙыҡһыныуыум көслөрәк булып сыҡты. Төргәкте асып, һарғайып бөткән ҡағыҙҙарҙы өҫтәлгә йәйеп барлай башланым. Тәүҙән уҡ иғтибарымды ҡатырға битле ҡалын дәфтәр йәлеп итте. Уның тышындағы латин хәрефле яҙыуҙы ҡыйынлыҡ менән ижекләп уҡый алдым: "Исламов Ғилмитдиндың тарих дәфтәре". Немец алфавиты булараҡ иҫтә ҡалған был хәрефтәр теҙмәһенең мәғәнәһе башҡортса булыуы, нисектер, ят, хатта быуаттар төпкөлөн хәтерләткәндәй тойолдо. Дәфтәрҙең тәүге битендә "16 октябрь 1933 йыл", тигәнгә күҙ һалғас, күнелемдән иҫәп-хисап эшен башҡарып, "Бәй, 82 йыл элек яҙылған бит!" тип аптыраным. Яҙыуҙарҙың айышына төшөнөр өсөн, беренсе класс балаһылай ижекләп, үҙемдә үҙем аңлар өсөн ҡысҡырып уҡырға тотондом: "Тема: "Капитал илдәрен солғап алған кризис. Кризистан ҡотолор өсөн капиталистар эшсе-крәҫтиәндәргә налогтар һалалар, эш хаҡтарын кәметәләр",- тигән латин хәрефле юлдарҙың осона сыҡҡансы танауға тир бәреп сыҡты. Һөйләмде уҡыһам да, мәғәнәһен аңламай, йәнә бер тапҡыр күҙ йөрөтөп баштан үткәргәс кенә, хәл-ваҡиғаларҙың 1933 йылға ҡағылыуын төшөндөм. "Тарих ҡабатлана", тигәндәре, күрәһең, дөрөҫтөр, бөгөнгө тормошобоҙ ҙа тап шул кризисты кисерә, тигән фекергә килеп, дәфтәрҙе ситкәрәк һалып, башҡа ҡағыҙҙарҙы барлай башланым.


Sәlәm xat.

Төргәктә 5 уҡыусы дәфтәре һәм 1939-1944 йылдарҙа яҙылған 34 хат ятыуы мәғлүм булды. Конверт тыштары кириллицала яҙылғанлыҡтан, яҙмаларҙың авторҙары Исламов Ғилмитдин һәм Кираметдин икәненә төшөнөү ҡыйынлыҡ тыуҙырманы. Хәтергә ҡылт итеп Мәликә (1890-1970) менән Мәфтуха (1882-1974) өләсәйҙәремдең бер әңгәмәһе иҫкә төштө:

- Ҡороп ҡалғыр анау һуғыш, баламдың башын ашаны, Нуритдиным сатан йә сулаҡ булып тере ҡайтһа ла риза булар инем, - тип күҙ йәштәрен һөртөп торған өләсәйем күҙ алдыма килеп баҫты. Ә апһыны Мәфтуха уны йыуатырға теләгәндәй:

- Эй, Мәликә, ярай әле, һинең Нуритдиныңдың ике малайы ҡалды, ә бына минең Ғилмитдинем менән Кираметдиным кәләш тә алып өлгөрә алмай һәләк булды. Нәҫелдәре бөттө уландарымдың! Исламовтар быуынының кем дауам итер? - тигән һүҙҙәрен иҫләп, аптырауға ҡалдым.

Аңыма яңы барып етте, был бит Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған Ғилмитдин һәм Кираметдин апаларымдың (Әбйәлилдә атайҙың өлкән ир туғандарына шулай тип әйтәләр) үҙ ҡулдары менән яҙған хаттары! Ҡәләм, күк, фиолет ҡара менән яҙылған, байтағы яртылаш юйылған хаттарҙы һаҡлыҡ менән генә берәм-берәм йәнә тотоп ҡараным. Ҡайҙа яҙылды икән? Окоптамы? Землянкаламы, блиндаждамы? Ниндәй шарттарҙа, ниндәй кәйефтә? Нимә тураһында һөйләй улар? Ят яҙыуҙы ҡапылда шытырлатып уҡый алмағаныма күңелем әсене. Эй, вайымһыҙ бала саҡ! Нинә шул өләсәйҙәремдән уландарының кем булыуын да һорай белмәгәнмен икән, тип үкендем.

Эҙләнеүҙәремде хаттарынан башланым. Аҙнанан ашыу ваҡытты Ғилмитдиндың Алыҫ Көнсығыштан, аҙаҡ Румыниянан яҙған хаттарын өйрәнеүгә бүлдем. Кираметдиндың 1941 йылдың 7 июнендәге берҙән-бер хатына таянып, уның менән хат алышҡан иптәше Зәйнетдин Ҡужиндың көнбайыш фронттан яҙған хаттарын анализлағас, апаларым яҙмышына ҡағылышлы анығ фекер туплай алдым. Ләкин был ғына әҙ ине әле. Хаттарҙа бәйән ителгән ваҡиғаларҙы тарихи осор менән бәйләйһе, Байым музейында һаҡланған документаль сығанаҡтарҙы өйрәнәһе, Ғилмитдин, Кираметдин һәм Нуритдиндың ҡустылары - Абдулла апамдан, атайым - Лоҡмандан белешмә алып, улар менән кәңәшләшәһе бар ине. Ниһәйәт, утлы йылдар шаһиты булған ошо хаттар сере менән һеҙҙе лә таныштырырға йөрьәт итмәксемен.

**Илдар ИСЛАМОВ.**
**Әбйәлил районы.**
**(Дауамы бар).**

✓ *"Ауырыуҙарығыҙҙы дауалау өсөн ярҙам итеп кенә тороғоҙ. Хәйриә эштәре бәндәләрҙе бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалай, сырхауҙарҙы ҡыуып тора. Улар һеҙҙең ғүмерҙе оҙайта, игелектәрегеҙҙе ишәйтә".*



*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ



**Ниңә Ҡөрьән Мөхәммәт ижад иткән китап була алмай?**

**- Һине рәнйеткем килмәй, һиндә Ҡөрьәнгә ҡарата булған ихтирамды беләм, уның ҡиммәтле китап икәненә ышанам. Әммә ниңә Ҡөрьән Мөхәммәттең ижады була алмай? Мөхәммәт кеүек һәләтле кеше Ҡөрьән кеүек китапты яҙа алыр ине. Уны Алла күктән индергән, тигәнгә ҡарағанда был төплөрәк булыр ине. Имеш, Алла Ябраил исемле фәрештәне бәйғәмбәрҙәрҙең береһенә китап тапшырыу өсөн күктән ергә ебәргән, тигәнгә теге замандарҙа кешеләрҙе ышандырыу барыбер ҡыйын булған бит…**

- Әммә беҙ йәшәгән осорҙа кешеләргә Алла һүҙен еткереүсе күҙгә күренмәҫ фәрештәләр булыуына ышанып була бит. Бөгөн оса торған "тәрилкәләр" тураһындағы сенсацион хәбәрҙәрҙе йыш ишетергә була, уларҙы алыҫ планеталарҙан килгән, тип уйлайҙар. Радиотулҡындар, уларҙың йышлыҡтары, фотокамералар, төндә күрә торған күҙҙәр, айға аяҡ баҫҡан кеше, Марс планетаһына ебәрелгән космик аппараттар менән кешене ғәжәпләндереп булмай бит инде. Ә Алланың Үҙ фәрештәләренең береһен йәшерен рәүештә Уның бәйғәмбәренә китап тапшырырға ебәреүендә аптырарлыҡ бер нәмә лә юҡ. Ысынлап та, бөгөнгө көндә Ябраилдың булыу мөмкинлеге кескенә сер, донъяла күпкә сәйерерәк нәмәләр бар. Беҙ улар хаҡында көн һайын ишетәбеҙ.

Ҡөрьәндең Мөхәммәт ижады түгеллеген яҡлағанда беҙ Ҡөрьәндең жанрына, теленә, тәрән фекерҙәренә һәм серҙәренә, теленең гүзәллегенә, сағыштырыуҙарына, лингвистик нәфислегенә һәм зауыҡлығына нигеҙләнәбеҙ, бындай әйбер кеше тарафынан ижад ителә алмай. Инде Мөхәммәттең уҡый-яҙа белмәүен дә иҫәпкә алһаҡ, цивилизациялы йәмғиәттән булмауын хәтерләһәк, ғүмерен Ғәрәбстанда үткәреүен иҫкә төшөрһәк, Ҡөрьәнде уның ижад итә алмауы көн кеүек асыҡ буласаҡ. Ҡөрьәндең Алланан булыуын инҡар итеүселәргә Алла былай ти: "Уға тиң берәй сүрә килтерегеҙ, әгәр хаҡлы икәнһегеҙ, Алланан башҡа берәүҙе саҡырығыҙ, булдыра алһағыҙ".

Ҡөрьәндең авторы Мөхәммәт булһа, ул унда үҙ ҡайғыборсолоуҙарын сағылдырыр, улар Ҡөрьән тексына тәьҫир итер ине. Белеүебеҙсә, Мөхәммәт үҙ тормошонда таяныс булып торған һөйөклө ҡатынын, оло ағаһын юғалта. Ә Ҡөрьәндә уларға ишара юҡ. Шулай уҡ Мөхәммәт улы Ибраһимды ла ерләй, был бөйөк юғалтыу хаҡында ла унда бер һүҙ ҙә юҡ. Ҡөрьән Мөхәммәт образын ситләтеп уҙа. Ҡайһы ваҡыт уның ғәмәлдәрен асыҡтан-асыҡ шелтәләй: "Бер генә бәйғәмбәргә лә әсирҙәргә эйә булыу килешмәне, әгәр һуғыш булһа ғына. Һеҙ яҡын донъя осраҡлыҡтарына ынтылаһығыҙ, ә Алла киләсәкте теләй. Алдаһыраҡ ингән Алла яҙмаһы булмаһа, оло язаға дусар булыуығыҙ һеҙгә лә ҡағылыр ине".

Ҡөрьәндең теке́сына күҙ һалһаҡ, фекерҙәр яңы, шиғырҙарҙың музыкаль, теле бай һәм образлы, һөйләмдәре тәьҫирле булыуын күрәбеҙ. Быға оҡшаш әҫәр Исламға тиклемге һәм Ислам осоро ғәрәп әҙәбиәтендә юҡ. Ғәрәп теле өс төргә бүленә: шиғри, сәсмә һәм ҡөрьәни. Беҙҙең алда шиғри йә сәсмә әҫәр ҙә түгел. Йырҙарҙың көйләлөгө ритмға, рифмаға, үлсәмгә, метрикаға бәйле, ә Ҡөрьәндең көйлөлөгө рифмаға бәйләнмәгән, ул Ҡөрьәндең нигеҙенә үк һалынған, был эске музыкаллек (миҫал килтереүҙән мәғнә юҡ, сөнки ғәрәп телен белмәгәндәр уларҙы аңламаясаҡ).

Тәбиғәт фажиғәләре, мәҫәлән, Туфан тураһында һөйләгәндә һөйләмдәр, телеграфтағы кеүек, ҡыҫҡа, киҫкен: "Әйтелгән ине. "Йә, ер, һыуыңды йот, йә, күк, ҡуҙғалма! Һәм һыу китте, бойороҡ үтәлде". Һөйләмдәр тәҙәүҙән, һүҙҙәрҙе урынлаштырыуҙың, һүҙ теҙмәләре һайлауҙың ҙур оҫталыҡ миҫалдары был. Тел образлы, яҡшы, һүҙҙәр иркен яңғырай, шиғрилек камиллыҡтың иң юғары баҫҡысына өлгәшкән, һәр һүҙ үҙ урынында. Беҙ телдең иң киткес зауыҡлы булыуын күрәбеҙ, шиғриәт тарихында уға тиң юҡ: "Беҙ орлоҡландырыусы елдәр ебәрҙек, күктән һыу төшөрҙөк һәм һеҙҙе һуғарҙыҡ".

Фәҡирлектән балаларҙы үлтереү хаҡындағы шиғырҙар ике формала: "...фәҡирлектән балаларығыҙҙы үлтермәгеҙ, беҙ уларҙы ашатырбыҙ". "Ярлылыҡтан ҡурҡып балаларҙы үлтермәгеҙ. Беҙ һеҙгә лә, уларға ла йәшәү кәрәклеген бирербеҙ". Беренсеһендә - әлеге ваҡытта балаларын ашатыу түгел, үҙҙәре ас ултырыусы, шул сәбәпле балаларын үлтереүсе кешеләргә (йәғни бала табырға теләмәгәндәргә) әйтелә. Шуға күрә Ҡөрьән башта: "Беҙ һеҙгә бирербеҙ", - ти, сөнки уларҙың ашарҙарына юҡ. Унан һуң: "Уларға ла бирербеҙ", - ти. Икенсеһендә хәл башҡасараҡ: әлеге минутта ашарҙарына бар, тик улар, ғаиләишәйһә, аслыҡ башланасаҡ, тип ҡурҡа. Шуға Ҡөрьән тәүгеләренә: "Балалар тыуғас, ҡурҡмағыҙ, беҙ уларға ризыҡ бирербеҙ, һеҙҙең өлөшөгөҙ кәмемәҫ", - ти. Кеше ижад иткән китаптарҙа бындай иғтибарлылыҡ юҡ.

Һүҙҙәрҙе алға йәки артҡа күсереүҙә бер маҡсат бар. Бурлыҡ хаҡындағы шиғырҙа уғры ир-ат уғры ҡатын-ҡыҙҙан алдараҡ иҫкә алына, йәғни ир ҡараҡ баштараҡ булған. Ә фәхишәлек, зина тураһындағы аятта ҡатын-ҡыҙ ир-атҡа ҡарағанда яуаплыраҡ, сөнки ул үҙ-үҙен тотошо (ҡылансыҡлығы) менән ир-атты зинаға тарта, шуға күрә аятта ла иҫкә иртәрәк алына.

Шул уҡ рәүешле ишетеүҙе күреүҙән алда иҫкә алған аят та тәҙәлгән: "Һеҙгә ишетеү, күреү, йөрәк бирә". "Һеҙгә Беҙ ҡолаҡ, күҙ, йөрәк бирҙек". "Уларға ишеттер, күрһәт". Ишетеү һәр ваҡыт күреүҙән алда йөрөй, шуға ла беренсе булып реакция белдерә. Ишетеүҙең күреүҙән үткерерәк, тиҙерәк, тулыраҡ булыуында шик юҡ. Бәйғәмбәрҙәр Алланы ишеткән, һөйләшкән, тик уны күрмәгән. Мөхәммәт Ҡөрьәнде ишетеп ҡабул итә. Әсәйҙәр күп бала араһында балаһын тауышынан таный.

Телдең шундай зауыҡлығын, һығылмалылығын беҙ Алланың төрлө кешеләргә мөрәжәғәтендә күрәбеҙ. Мәҫәлән, Алла мосолмандарға мөрәжәғәт иткәндә: "Мине иҫкә алығыҙ. Мин дә һеҙҙе иҫтә тотам", - ти. Ә йәһүдтәргә өндәшкәндә Алла: "Исраил улдары! Мин һеҙгә төшөргән рәхмәттәремде онотмағыҙ!" - ти. Йәһүдтәр Алланы үҙ мәнфәғәттәренән сығып ҡына иҫкә алыусан, мосолмандар иһә Алланы уға булған мөхәббәтенән иҫкә ала, ә файҙа эҙләп түгел.

Ғалим һәм наҙандарға мөрәжәғәт тә шул мәғәнәгә эйә: "Уйсандар, уйлап эшләүселәр. Минән ҡурҡығыҙ!" "Кешеләр вә таштар яғыулыҡ булаһы уттан ҡурҡығыҙ!" Күпселек ябай халыҡ уттан ғына ҡурҡа, сөнки Алланың теләһә ниндәй уттан көслөрәк икәнлеген белмәй, ә ғалимдар аңлай һәм шуға күрә Алла уларға белем дәрәжәһенә ҡарап мөрәжәғәт итә.

Ҡөрьәндә кисереү тураһындағы һүҙҙәр язалау һүҙҙәренән алда килә. Беренсе сүрәлә Алла "мәрхәмәтле үә шәфҡәтле" тигән һүҙҙәрҙе "Ҡиәмәт көнө Хужаһы" һүҙҙәренән алда әйтә. Ул Үҙен һәр ваҡыт Үҙе теләгәнде кисереүсе һәм теләгәнен язалаусы итеп күрһәтә.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ХӘҘИСТӘР БИРГӘН ҺАБАҠТАР

**Ғибәҙәткә һәм йолаларға ғына бирелеп киткән күптәр бөгөн диндең хикмәтле хөкөмдәренә ҡолаҡ һалып бармай, тормошта уларҙы йүнәлеш итеп тә ала белмәй. Ә бит диндең нигеҙе - әҙәп менән күркәм холоҡ.**

"Бер генә ата ла үҙ балаһына күркәм холоҡтан да ҡиммәтерәк бүләк бирә алмаҫ", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһи үәс-сәләм.

"Яҡшылыҡты үҙегеҙ эшләй алмаһағыҙ ҙа, яҡшылыҡҡа башҡаларҙы өйрәтеүҙән баш тартмағыҙ. Яманлыҡтан үҙегеҙ тыйыла белмәһәгеҙ, башҡаларҙы унан тыя белегеҙ".

"Яҡшылыҡҡа өйрәтеүселәрҙән һәр кем, хатта диңгеҙҙәге балыҡтар ҙа гонаһтарынан ярлыҡауҙы һорар".

"Мөьмин кеше бер ҡатлы, изге була. Боҙоҡ кеше генә мәкерҙән һәм кешеләрҙе хурлап йөрөүҙән арына алмай".

"Әҙәпкә мине Аллаһы Тәғәлә үҙе өйрәтте, күркәм холоҡло итеп Ул тәрбиәләне", - тиелә хәҙистәрҙә.

"Минең өммәтем өсөн йәннәткә инеүҙең иң яҡшы юлы - тәҡүәлек менән күркәм холоҡ".

"Ата-әсәнең шатлығы Аллаһҡа ла һөйөнөс, ата-әсәнең асыуын килтергән нәмә Аллаһты ла асыуландыра".

"Ауырыуҙарығыҙҙы дауалау өсөн ярҙам итеп кенә тороғоҙ. Хәйриә эштәре бәндәләрҙе бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалай, сырхауҙарҙы ҡыуып тора. Улар һеҙҙең ғүмерҙе оҙайта, игелектәрегеҙҙе ишәйтә".

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

**Ҡорбан комплексынан нисек ҡотолорға**

